ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

14-20 сентябрь (һарысай) 2019
№37 (871)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Тәнде түгел, рухты дауалауҙан башларға кәрәк тип врачтар һис юҡҡа әйтмәй ҙәбаһа. Рухы ныҡтың - тәне ныҡ, рухы һауҙың - тәне һау. Тән ауырыуын рухты һауыҡтырыу менән тиҙерәк еңергә мөмкин. Был хәҡиҡәтте боронғо аҡыл эйәләре, табиптар әлмисаҡтан тапҡан, ҡулланған, әҙәмдәрҙе һауыҡтыра килгән. Беҙ үҙебеҙ генә шуны белмәү йә тейешенсә иғтибарламау, ҡулланмау арҡаһында һаулығыбыҙҙы иртә юғалтабыҙ, төрлө ауырыуҙарға һабышабыҙ түгелме һуң?*

***Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Эш туҡмағы - аш!**

Белем алыуҙыҡы ла...



6

**Әйт әле, Гөлнәзирә,**

ҡайҙан һуң ирланд ҡыҙында башҡорт һағышы?



7

**Генерал йондоҙо**



8-9

**Депутат ярҙамсыһы ла,**

бушлай кофе ла юҡ унда



12

**ТВ-программа** 14

АФАРИН!

# ҠАЙҘА ТЫУҺАҢ, ШУНДА КӘРӘК БУЛ!



**Иң тәүҙә республика халҡын "Афарин!" тип алҡышлағы килә: 8 сентябрҙә үткән һайлауҙарҙа уларҙың 71,82 проценты һайлау участкаларына килеп, үҙенең граждандыҡ бурысын үтәне. Коммунистар партияһы ағзалары үҙҙәренең төбәк башлығы вазифаһына кандидат Юнир Ҡотлоғужинға (6,89 процент), Либерал-демократик партияныҡылар - Иван Сухаревҡа (4,53 процент), "Яблоко" партияһыныҡылар - Зөлфиә Ғайсинаға (1,53 процент), "Ғәҙел Рәсәй"ҙәр - Юрий Игнатьевҡа (1,23 процент), "Рәсәй патриоттары"ныҡылар - Рәфис Ҡадировҡа (1,10 процент), "Граждандар көсө"нөкөләр - Владимир Барабашҡа (0,97 процент) һәм "Социаль ғәҙеллек өсөн Рәсәй пенсионерҙар партияһы"ныҡылар Владимир Кобзевҡа (0,81 процент) тауыш бирҙе. Ә Радий Хәбиров өсөн тауыш биреүселәр һайлаусыларҙың 82,02 процентын тәшкил итте. Шулай итеп, Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Фәрит улы 10 ай эсендә үҙенең атҡарған эштәре, алып барған сәйәсәте менән һайлаусыларҙың ышанысын ныҡлап ауланы, тигәнде аңлата булыр был һандар.**

**(Дауамы 3-сө биттә).**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ТӘБИҒӘТЕБЕҘГӘ...

## еңел ҡарамайыҡ

**Мин күптән хаҡлы ялда. Ләкин әле лә граждандыҡ позициямды юғалтмайым, төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашам, теге йәки был эш буйынса үҙ фекеремде белдерәм, йәштәргә кәңәштәр бирәм. "Киске Өфө" аша ҡайһы бер уйланыуҙарым менән бүлешеп үткем килә. Уны ҡабул итәһегеҙме, юҡмы - һеҙҙең ректә.**

Беҙҙе "Тәбиғәтебеҙ - төп байлығыбыҙ", тип үҫтерҙеләр. Ошо тәрбиә ҡанға шул тиклем һеңгән һәм тәбиғәткә еңел ҡараусы кешеләрҙе бөтөнләй аңламайым. Урман менән эш итеүсе эшҡыуарҙар бихисап хәҙер. Тик машиналарҙы лыҡа тултырып ағастарыбыҙҙы оҙатыусыларҙың ҡайһы берҙәре үҙе артынан урманды таҙалау тураһында бөтөнләй онота. Ә йәш үҫентеләр ултыртырға теләүсе эшҡыуарҙар бөтөнләй бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Ябай ауыл кешеһе, миҫал өсөн, 5х5 йорт һалыу өсөн тиҫтәләгән йыл үҙенә закон буйынса тейешле ағасты көткәндә, көнөнә бер нисә буралыҡ ағастар алып килеп ауҙарыусыларҙы күреп ғәжәпләнергә генә ҡала. Улар төрлө аукциондар үтеп, кәрәкле ағастарҙы һатып ала, ти, ләкин ни өсөн һатырға ағас бар, ә үҙенә өй күтәрергә теләүсегә ағас юҡ. Кем аңлата ала ошоно? Ҡайҙа логика?

Мин йәш саҡта етәкселәр барыбер халыҡҡа яҡыныраҡ булды, тип һанайым. Уларҙы, исмаһам, йыш уҙғарылған дөйөм йыйылыштарҙа күреп, үҙ һорауыңды бирергә мөмкин ине. Шәхсән күрешеү ҙә артыҡ ауырлыҡ тыуҙырманы. Хәҙер иһә район, ҡала башлыҡтарын тик гәзит биттәрендә һәм интернет селтәрендә генә күрәбеҙ. Шулай ҙа был йәһәттән әҙерәк алға китеш бар. Социаль селтәрҙәрҙә үҙҙәренең шәхсән биттәрен булдырып, анда-бында булһа ла яуап бирергә тырыша улар. Шулай уҡ ауылдарға йөрөп халыҡ менән күрешеп, һөйләшеп, тыңлап ҡайтыуҙары ла хуп күренеш. Шул халыҡ булмаһа, улар ҙа түрҙә ултырмаҫ ине, тимәк, ябай кешеләргә иғтибарлы һәм ихтирамлы ҡараш артыҡ булмаҫ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ



**Һәр замanda ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# ДӘРЕСТӘР...

## туған тел иҫәбенә кәметелә

***Мөнир ИҠСАНОВ, шағир:*** Башҡорт теле уҡытыусыһы булараҡ, мәғариф учреждениеларында туған телде уҡытыу мәсьәләһе борсой. Йәш быуындың башҡорт телен белеү кимәле түбәнәйеүен дауам итә. Туған телдәрҙе күтәрмәләүгә йүнәлтелгән төрлө саралар күрелеүгә ҡарамаҫтан, республика етәкселеге һәм хатта федераль кимәлдәге чиновниктар был өлкәлә эштәр эшләнеүен белдерһә лә, мәсьәлә актуаллеген юғалтҡаны юҡ. Үҙем уҡытыусы булараҡ, кире һөҙөмтәләрҙе лә күҙәтәм ҡайһы саҡ. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бөгөн мәктәптә уҡытыу планы төҙөгәндә рус һәм сит телдәргә өҫтөнлөк бирелә. Был туған тел дәрестәрен ҡыҫҡартыу иҫәбенә тормошҡа ашырыла. Мәҫәлән, икенсе сит тел индерелеү арҡаһында ғына милли мәктәптәрҙә 5-6-сы синыфтарҙа башҡорт теле дәрестәре аҙнаһына бер сәғәткә кәмене. Һөҙөмтәлә уҡытыусылар Зәкиә Ғәбитованың 2017 йылда ғына баҫылып сыҡҡан белем биреү өлгө программаларын ҡыҫҡартып ҡулланырға мәжбүр. Башҡорт әҙәбиәте буйынса Миндибай Юлмөхәмәтов төҙөгән өр-яңы уҡытыу программалары менән дә шул уҡ хәл. Йәғни, яңы программалар, дәреслектәр сығып та өлгөрмәй, уҡытыу планына үҙгәрештәр индерелә.

Рус дәүләт теленән айырмалы, башҡорт дәүләт теленә сәғәттәр бик аҙ бүленеүе күңелде ҡыра. Өҫтәүенә, хәҙер һайлау мөмкинлегенән файҙаланып, күп уҡыусылар рус телен туған тел булараҡ та өйрәнеүҙе хуп күрә. Туған телен яратмауҙан түгел, ә ғәмәли йәһәттән отошло булыуҙан сығып шулай эшләй улар. Рус теленән Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырырға кәрәк бит. Әгәр БДИ ике дәүләт теленән дә мотлаҡ тапшырылһа, был уларҙың хоҡуҡтарын тиңләштереүгә бер аҙым булыр ине. Ә әлегә Башҡортостанда, башҡа милли республикаларҙа ике дәүләт теленә тиң ҡараш, тигеҙ мөнәсәбәт булдырылған, тип әйтә алмайбыҙ. Һис шикһеҙ, гранттар бүленә, төрлө күтәрмәләүсе программалар эшләй, ләкин уларҙың файҙалылыҡ коэффициенты бик түбән. Туған телдәргә ҡағылышлы мәсьәләләр хөкүмәт кимәлендә хәл ителергә һәм уның һөҙөмтәләре ҡаты талап ителергә тейеш. Ҡабул ителгән ҡарарҙар, сығарылған закондар тулы кимәлендә үтәлмәй, юғиһә. Чиновниктар был мәсьәләне үҙҙәре лә һанға һуҡмай, шуға туған телдең кәрәклеген әйтеп еткерергә тырышһалар ҙа, халыҡ аңлап етмәй. Бер яҡтан, хөкүмәт яуаплылығы талап ителһә, икенсе яҡтан, һәр ғаилә эсендә эшләү мөһим.

Туған телде белеү-белмәү мәсьәләһе балалар баҡсаһы, мәктәп даирәһенә генә ҡағылмай. Ул шәхестең дөйөм аң кимәле, белеменә һәм донъяға ҡарашына ла йоғонто яһай икәнен беләбеҙ. Был йәһәттән, шағир булараҡ, башҡорт әҙәбиәтенең киләсәген ҡайғыртып та әйтә торған фекерем бар. Бына бөгөн, ғәҙәттә, яҙыусы йә шағирҙың китабы 1 мең дана булып баҫылып сыға. Шуның 200-300 данаһы Өфөлә китап магазинында һатыла, бер өлөшө китапханаларға таратыла. Бына шул китап магазиндарының райондарҙа булмауы ҡыҙғаныс: бөтәһе лә баш ҡалаға башҡортса яңы китап артынан барып етә алмай. Ә былай, ғөмүмән әйткәндә, поэзияға ла, прозаға ла мохтажлыҡ бар. Бөгөн беҙ башҡорт әҙәбиәтенең хәле бигүк мөшкөл түгел, тип билдәләһәк тә, тағы ун-ун биш йылдан башҡорт телен белмәгән быуын вәкилдәре үҫеп еткәс, нисек булырын күҙ алдына килтереүе лә ҡурҡыныс. Әлеге көндә китап уҡыусыларға бер аҙ мохтажлыҡ кисерәбеҙ икән, киләсәктә саф башҡорт телен камил белгән әҙәбиәтселәргә лә ҡытлыҡ килмәҫ, тимә.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ТӘБИҒӘТЕБЕҘГӘ...

## еңел ҡарамайыҡ

**(Башы 1-се биттә).**

Түрәләргә ҡағылышлы тағы бер күренеште әйтеп үткем килә. Үҙебеҙҙең башҡорт телендә, минең күҙәтеүемсә, тик Бөрйән районы башлығы ғына аралаша, иғландар яҙа, һорауҙарға яуап бирә. Ә ҡалған етәкселәр республиканың дәүләт теле булып һаналған башҡорт теленә ни өсөн иғтибарһыҙлыҡ күрһәтә? Әгәр ҙә башҡа милләттән икән, үҙ яҙмаларын башҡорт теленә тәржемә итеп ҡуйыуҙы талап итергә кәрәк. Ә башҡорт булып та, урыҫ телендә генә яуап биреп ултырған түрәләр нимә уйлайҙыр, аптырайым. Ана, Шәриповтан үрнәк алығыҙ, тип әйтке килә уларға.

Эскелеккә ҡаршы көрәштең дауам итеүен күреп-белеп торабыҙ. Магазиндарҙа спиртлы эсемлектәр һатыу ваҡыты ҡыҫҡартылыу, байрамдар ваҡытында уларҙы һатыуҙан алыу, "Айыҡ ауыл" кеүек конкурстарҙың үтеүе бик мәслихәт. Ләкин оҙаҡ йылдар дауамында ҡайһы берәүҙәрҙең аңында тәрән тамырланған еңел кәсепте тиҙ генә йолҡоп алыу ауыр икән. Мәҫәлән, республиканың бер районында таксистар рәхәтләнеп сәмәйен дә, араҡыһын да, һыраһын да, ғөмүмән, бөтә төр спиртлы эсемлектәр ҙә һатып йөрөй. Ауыҙы араҡы тип шапылдап торғандарға хәҙер йәйәү йөрөйһө лә түгел, ваҡыт һуң, тип ҡайғырыу ҙа юҡ, такси саҡырта ла кәрәклеһен һатып алаһың. Ошондай "эшҡыуар"ҙарҙың ҡойроғон ҡыҫыу әмәлен уйлап табыу мөһим.

Яңы уҡыу йылы башланды. Быйылдан алып мәктәптәрҙә кәрәҙле телефондар менән ҡулланыуҙы сикләүҙе күҙаллайҙар, тип ишеттем. Бик тә мәслихәт. Ике күҙе һәр саҡ телефон экранына текәлгән, ҡолаҡсындарын тағып музыка тыңлап йөрөгән балаларҙы ла, үҫмерҙәрҙе лә йыш күрәм. Хатта паркта бергә ваҡыт уҙғарырға килеүселәр ҙә төрлө яҡҡа ҡарап телефон "соҡоп" ултыра. Бөтөнләй ҙә роботтар хәленә керәп барабыҙ, буғай. Күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеү, күмәкләп ултырып аралашыу, яңылыҡтар бүлешеү онотола бара. Был тенденция ныҡлап тамырланмаҫ элек унан арыныу мөһим. Бигерәк тә балаларыбыҙҙы ҡотҡарыу шарт. Шуға күрә әлеге яңылыҡ эшләй башлаһа, тик яҡшы һөҙөмтәләргә генә килтерер тип ышанам.

Әйткәндәй, яңыраҡ баш ҡалабыҙҙа булырға тура килде. Үҙгәргән, матурланған Өфөбөҙ. Ләкин Ҡала мәҙәниәт һарайы районында трамвай күреп, халыҡ әйтмешләй, саҡ ҡолап китмәнем. Ундай "тарихи ҡомартҡылар" нисек әле булһа йөрөп ята икән? Был иҫке трамвайҙар күптән "хаҡлы ялда" булырға тейештер ҙә ул. Ә бына Октябрь проспекты буйлап һуҙылған трамвай юлдарын алып ташлау дөрөҫ булған. Урам иркенәйеп, киңәйеп ҡалған. Трамвайҙарҙы кире проспектҡа ҡайтармаҡсылар, тип ишеткәйнем, был ысынбарлыҡҡа тап килмәйҙер, тип өмөтләнәм. Автобустар һаны етерлек, минеңсә.

**Ғәлим ЯХИН.**
**Ҡыйғы районы.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**Һеҙгә 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башланыуы тураһында хәбәр итәбеҙ.**
**1 сентябрҙән республиканың һәр ҡала-район-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 676 һум 02 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Был турала таныштарығыҙға, әйләнә-тирәләгеләрегеҙгә лә еткерһәгеҙ ине.**

• Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торабыҙ икәнде беләһегеҙ. Сентябрҙә 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан кемдәрҙер **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан", Зөлфиә Ханнанованың "Мин башҡорт, тип танышығыҙ", Таңһылыу Ҡарамышеваның "Мәңгелек сәфәр", Азат Ярмуллиндың "У истоков Башкирской республики", "2020 йылға башҡортса дини календарь"** китаптарына эйә буласаҡ. **Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru.** Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru.**
Беҙҙең төркөм: **vk.com/kiskeufa**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандағы һайлау һөҙөмтәләре тураһында Рәсәйҙең Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Элла Памфилова: "Төбәк башлыҡтарын һайлауҙа иң юғары конкуренцияларҙың береһе Башҡортостан Республикаһында булды. Радий Фәрит улы Хәбиров лайыҡлы һөҙөмтә менән һайлауҙа еңеп сыҡты. Республиканан ялыуҙар ҙа юҡ тиерлек. Был бик лайыҡлы, был хөрмәт уята. Башҡаларға өйрәнәһе бар тип уйлайым: үҙ көсөңә ышан, көнәркәштәрең менән ғәҙел алыш һәм ғәҙел еңеү яула", - тине.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы инаугурацияһы 2019 йылдың 19 сентябрендә уҙа. Был хаҡта республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә белдерелде. Шунан һуң министрҙар кабинетында республиканың 2024 йылға тиклемге үҫеше тураһында документты уҡып ишеттерәләр.

✓Андрей Назаров республика Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Был турала Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров хәбәр итте. "Барығыҙ ҙа уны беләһегеҙ, баһа биреп тормайым, - тине Радий Хәбиров. - Бөтә тейешле документтарҙы әҙерләүегеҙҙе һорайым".

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин көс структураларында тәғәйенләүҙәр тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Атап әйткәндә, Башҡортостандың Тәфтиш идаралығын Рәсәйҙең Силәбе өлкәһе буйынса Тәфтиш комитетының элекке башлығы Денис Чернятьев етәкләй.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров ҡабул иткән Указға ярашлы, музыка, театр, һынлы һәм хореография сәнғәте өлкәһендәге һәләтле йәштәргә 50 миллион һум күләмендә республика Башлығы гранты тапшырыла. Грант 2019 йылдан башлап йыл һайын бүленәсәк. Республика Хөкүмәтенә грант биреү тәртибен, комиссия составын, сығымдарҙы финанслау сығанаҡтарын раҫлау һәм уға бүленгән аҡсаны маҡсатҡа ярашлы файҙаланыуҙы контролдә тотоу бурысы йөкмәтелде.

✓Лондонда Халыҡ-ара паралимпия комитеты эгидаһы аҫтында барған йөҙөү буйынса донъя чемпионатында Башҡортостан спортсыһы алтын миҙал яуланы. Анна Крившина һуҡырҙар спортында арҡала 100 метрға йөҙөүҙә иң яҡшы ваҡыт күрһәтте. Лондондағы донъя беренселеге наградалары өсөн 60 илдән 600 спортсы көс һынашты.

✓ *"Бөтә тырышлығыбыҙҙы туплағанда, закондар сығарыу, башҡарма власть, хоҡуҡ һаҡлау тармаҡтары көсөн, муниципалитеттар башлыҡтары эшмәкәрлеген берләштергәндә генә республиканы үҫтереү бурысын атҡарып буласаҡ".*



*АФАРИН!*

# ҠАЙҘА ТЫУҺАҢ, ШУНДА КӘРӘК БУЛ!

**(Башы 1-се биттә).**

..."Өйҙә эшләү" бәхетен татырға күптән хыялланған булғандыр Радий Фәрит улы. Уның Мәскәүҙә Башҡортостан студенттары алдындағы сығышын әле булһа телгә алып һөйләй йәштәр: "Һеҙ Мәскәүҙе яулау өсөн конкурентлы көрәшкә аяҡ баҫтығыҙ. Ләкин "Ҡайҙа тыуһаң, шунда кәрәк бул!" тигән мәҡәл бар. Һеҙҙе Башҡортостанда бик көтәләр. Мин һеҙҙең республиканы алға, сәскә атыуға алып барыусы локомотив булырығыҙға ышанам. Был һеҙҙең ҡулдан киләсәк. Ләкин мин үҙемде лә һеҙҙән айырып ҡарамайым - беҙҙең ҡулдан киләсәк!" Ошо һүҙҙәре менән Радий Фәрит улы йәштәргә лә, үҙенә лә маҡсат ҡуйҙы, тип аңларға кәрәк быны. "Ҡайҙа тыуһаң, шунда кәрәк бул!" - был бөгөнгө йәштәребеҙ өсөн иң мөһим саҡырыуҙыр ул.

Был һүҙҙәре лә шуны раҫлай: "Бер саҡ оператив кәңәшмә ваҡытында мин, бик онотолоп китеп, хыялланыусан йөҙ менән ултырғанмындыр инде, - тип тә һөйләгәйне ул саҡта Радий Фәрит улы. - Мине яҡшы белгән етәкселәремдең береһе быны шәйләгән һәм миңә: "Радий, Башҡортостан тураһында төш күреүеңде туҡтат инде", - тине. Мин уға шулай тинем: "Беләһегеҙме, был мин үтәй алмаған берҙән-бер үтенес. Сөнки ул минең ватаным һәм мин һәр ваҡыт үҙемдең республикам тураһында төштәр күрәсәкмен һәм уйлаясаҡмын", - тинем..."

Күрәһең, Радий Фәрит улының да, беҙҙең дә бер ҡандан, бер рухтан булған етәксе тураһындағы хыялдар тормошҡа ашты: ул былтыр октябрҙә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп тәғәйенләнде, ә әле генә үткән һайлауҙарҙа һайлаусыларҙың 1 миллион 800 меңгә яҡыны уның кандидатураһы өсөн тауыш биреп, республика киләсәген, халыҡ яҙмышын уның ҡулына тапшырып ҡуйҙы. Һуңғы йылдарҙағы "һоролоҡтан", тотороҡһоҙлоҡтан, өмөтһөҙлөктән арынырбыҙ, Башҡортостаныбыҙға элекке ҡеүәт, элекке оптимизм һәм энтузиазм, маҡсатлы йәшәйеш әйләнеп ҡайтыр, тигән өмөт тыуҙы бына. Аҡлана күрһен беҙҙең ышаныс, тип теләйек.

Эйе, ул республикаға, тыуған Башҡортостанына идара итеү мәктәбенең бар һынауҙарын үтеп, йәғни иңенә республика кимәлендәге етәксе вазифаһы сифаттарын туплап, федераль үҙәктә идара итеү стратегияһын һәм тактикаһын үҙләштереп, шулай уҡ Рәсәйҙең бик ҙур Красногорск муниципалитетында эшләү тәжрибәһен артмаҡлап, тыуған төбәгендә, "үҙ йортонда" һөҙөмтәле эшмәкәрлек атҡарыуға дәртләнеп ҡайтты. "Мин республика халҡы алдындағы яуаплылыҡты бик яҡшы аңлайым. Бөтә көсөмдө Башҡортостан Республикаһының артабанғы үҫешенә һәм уның халҡының тормошон яҡшыртыуға йүнәлтәсәкмен. Нәҡ ошо бурыстарҙы үтәүҙе һәр ҡайһығыҙҙан һораясаҡмын һәм талап итәсәкмен. Бөтә тырышлығыбыҙҙы туплағанда, закондар сығарыу, башҡарма власть, хоҡуҡ һаҡлау тармаҡтары көсөн, муниципалитеттар башлыҡтары эшмәкәрлеген берләштергәндә генә республиканы артабан үҫтереү бурысын атҡарып буласаҡ. Эшебеҙҙе дүрт миллионлы республика халҡы мәнфәғәтенән, һәр граждан мәнфәғәтенән сығып, асыҡлыҡ, законлылыҡ, эш урынындағы һөҙөмтәлелек нигеҙендә төҙөргә тәҡдим итәм..." - тине ул ошо вазифаға билдәләнгән көндә депутаттар, республика етәкселәре, йәмәғәтселек алдында.

Яңы етәксенең буш һүҙ менән һыйлай торғандарҙан түгел икәнен шунда уҡ тойҙо халыҡ. Баштараҡ уның бер төбәктән икенсе төбәккә сәфәрҙәрен, аралашыуҙарын ҡыҙыҡһынып күҙәттеләр. Уның тарафынан Көньяҡ Урал төбәгендә күптән күҙәтелгән ғәҙелһеҙлеккә - законһыҙ таш сығарыуҙарға кәртә ҡуйыу халыҡ араһында киң хуплау тапты. Радий Фәрит улы шулай уҡ Өфө халҡының ҡанын ҡыҙҙырған пассажирҙар ташыусы автотранспорт хеҙмәтләндереүендә тәртип булдырҙы. Артабан сүп-сар реформаһын атҡарыуҙың республика халҡы өсөн уңайлы вариантын тәҡдим итте, йәғни был хеҙмәт өсөн түләүҙәрҙе кәметтереп, тармаҡ эшмәкәрлеген үҙ контроле аҫтына алды. Подъездарҙы тәртипкә килтереү, юлдарҙы ремонтлау, йәғни донъяларыбыҙҙы төҙөкләндереү менән шәхсән үҙе шөғөлләнә башланы. Төҙөкләндереү, тигәндән. Был эш бит беҙҙә юлдарҙы, ихаталарҙы төҙөкләндереүҙе генә лә аңлатмай ине. Беҙҙең бик күп етәкселәрҙең, граждандарҙың, йәмәғәтселектең аңын, эшкә мөнәсәбәтен дә, идара итеү алымын да "төҙөкләндереү" кәрәк ине. Шундай тырышлыҡ һалды ла инде Радий Фәрит улы ошо ун ай эсендә. Уның "үҙ ҡулдары менән идара итеү" (ручное управление) алымын хуплағандар ҙа, хупламағандар ҙа булды, хатта Башҡортостан Башлығы вазифаһына кандидаттарҙың ҡайһылары "үҙ ҡулдары менән идара итеү" алымын ҡаты тәнҡит утына тотоп маташты. Әммә беҙҙең һуңғы йылдарҙағы бөтә өлкәләрҙә лә барлыҡҡа килгән көрсөк шарттарында, етәкселәрҙең күбеһенең эшләмәй генә, "туй генералы" булып йөрөү ғәҙәте өҫтөнлөк иткән йәмғиәттә ошо алымһыҙ булмай икәнен төшөндө халыҡтың аңлы ҡатламы, һәм бар ерҙә уны саҡыра, көтә башланылар. Ә ҡайҙа уның һүҙе, контроле, проблемалы йөктө ҡуҙғатырға кәрәк, был эшкә интернет киңлегенән "Инцидент" программаһы һөҙөп сығарған орандар, мөрәжәғәттәр, саҡырыуҙар ярҙам итте...

Радий Фәрит улының иң тәүҙә чиновниктарҙы халыҡ менән иғтибарлы мөнәсәбәт урынлаштырырға саҡырыуы ла юҡтан барлыҡҡа килмәне бит: "... чиновниктың тәкәбберлеген, тупаҫлығын, кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙә эрелеген тамырынан ҡоротоуҙы талап итәсәкмен, - тип айырып әйтте ул. - Кешеләр менән кешеләрсә мөғәмәлә итергә кәрәк... Етәкселәрҙең эшмәкәрлеген мин ике төп критерий - һөҙөмтәле профессионаллек һәм кешелек сифаттары, башҡалар менән мөнәсәбәттәрҙәге намыҫлылыҡ буйынса баһалаясаҡмын. Мин һеҙҙең кешеләр менән партнерҙарса, өлкән иптәштәрсә мөнәсәбәт ҡороуығыҙҙы теләйем. Беҙҙең республикала байҙарса мөнәсәбәт булмаясаҡ. Чиновниктарҙың халыҡ менән танау күтәреп аралашыуы булмаясаҡ. Ысынында, һеҙҙе бит был эшкә берәү ҙә көсләп килтереп ҡушмаған. Һеҙ халыҡҡа хеҙмәт итергә килгәнһегеҙ. Шуның өсөн эшегеҙҙе шулай ойошторорға кәңәш итәм: кешеләрҙе ишетегеҙ, уларға иғтибарлы булығыҙ һәм мәсьәләләрен хәл итегеҙ. Бәлки һеҙ берәүҙән дә рәхмәт һүҙе лә ишетмәҫһегеҙ. Киреһенсә, һеҙгә халыҡтан тәнҡит һүҙҙәре күберәк тә яуыр. Донъя шулай ҡоролған. Ҡасан да булһа ишетерһегеҙ һеҙ ул рәхмәт һүҙен, ләкин уға тиклем һеҙгә бик оҙаҡ һәм егелеп эшләргә тура киләсәк әле..."

Был һуңғы һөйләмдәге һүҙҙәрҙең мәғәнәһен Радий Фәрит улы башҡа етәкселәргә генә түгел, үҙенә лә төбәгәндер, тип уйланыла хәҙер. Ошо ун ай эсендә уның үҙенә лә күтәрмәләү, хуплау, һоҡланыу ғына түгел, тәнҡит һүҙҙәре лә ишетергә тура килде бит. Ни эшләмәк кәрәк, халыҡ әйтмешләй, "яҡшы атҡа ҡыңғырау тағалар". Радий Фәрит улының эштәренә көнләшеп ҡараусыларҙың, хөсөтсөләрҙең тәнҡите әллә ни борсолоу тыуҙырмай - улар шуның менән үҙенә сәйәси йә матди капитал туплай. Әммә ҡайһы бер милләттәштәрҙең ҡаршы яҡҡа сығыуы барыбер ҙә күңелде ҡыра. Эйе, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы мәлендәге бер бәләкәй генә ваҡиғаны күбәләй итеп шаулатып, Радий Фәрит улын һәм ҡайһы бер чиновниктарҙы ғәйепләүҙәр булды. Ләкин ошо хәлде һөңгө осона алғандарҙың үсегергә, үс итергә түгел, ә яңы етәксе менән аңлашыу юлын табырға, үҙҙәренә дөрөҫлөккә тап килмәгән яла яғылыуы тураһында аңлатырға тырышыуы дөрөҫ булыр ине. Әммә беҙҙең ҡыҙыу баш егеттәрҙең йыш ҡына ошондай диалогтарға түҙемлеге етмәй китә шул. Ә шулай ҙа ошонда тағы бер тапҡыр аҡһаҡалдар иҫкәртеүен телгә алып китке килә: көтөү кирегә боролған мәлдә "артта һөйрәлеүсе әтрәгәләмдәр" алға сығыусан. Бына шундай артта һөйрәлгән һәм донъяны артҡа һөйрәгән, әммә әрһеҙлеге арҡаһында ваҡиғалар башында булырға һәләтлеләрҙән Хоҙай һаҡлаһын яңы етәксебеҙҙе. Сөнки тап шундайҙар дөрөҫ булмаған мәғлүмәт таратырға, кемдәрҙелер кемдәргәлер ҡаршы ҡуйырға һәләтле булыуы менән ҡурҡыныс. Беҙ был тарихты баштан кисерҙек бит инде...

**Әйткәндәй, сит тарафтарҙа, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, хатта Америка тарафтарында беҙҙең уңышлы, юғары дәрәжәләргә өлгәшкән егеттәребеҙ бихисап икәнен беләбеҙ. Әммә улар республикаға ҡайтырға, Башҡортостанына хеҙмәт итергә бер ҙә ашҡынып тормай. Сөнки тегендә улар берәү алдында ла яуаплылыҡ тоймай. Ә Радий Хәбировты тыуған ере, халҡы алдындағы яуаплылыҡ ҡурҡытманы бит. Ошоно аңлау ғына ла уның командаһында булырға, уға теләктәшлек итергә, уны ыңғай баһаларға сәбәп булып торалыр, моғайын. Радий Фәрит улы Башҡортостанға ҡайтҡас, үҙе туплаясаҡ команда тураһында шундай һүҙҙәр әйткәйне: "Минең командала булыу бик ябай. Ни бары кешеләрҙең хәстәрен уртаҡлашырға, уларҙы борсоған мәсьәләләрҙе белергә һәм шуларҙы хәл итергә теләк кенә кәрәк". Ошо шарттарға ярашлы команда тупланһын, фекерҙәштәре, лайыҡлы арҡадаштары менән үҙ маҡсаттарын, атап әйткәндә, ошо көндәрҙә ҡул ҡуйыласаҡ Башҡортостандың 2024 йылға тиклемге үҫеш стратегияһы тураһындағы указда билдәләнгәндәрҙе, тормошобоҙҙо арыу яҡҡа үҙгәртә торған төрлө закон-ҡарарҙарҙы, шулай уҡ халыҡтың хыялында, ихтыярында һәм ихтыяжында булған талаптарҙы ғәмәлгә атҡарырға яҙһын, тип теләге килә Башлығыбыҙға.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән проекттарға ярҙам итеү өсөн Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттарын алыуға иғлан ителгән өҫтәмә конкурсҡа ғаризалар сентябрҙең 16-һына тиклем Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығында 12-се бүлмәлә ҡабул ителә.

✓Башҡортостандың айырыуса һәләтле уҡыусыларына 2019-2020 уҡыу йылында республика Башлығы стипендиялары тапшырыла. Шулай уҡ сәнғәт, физик культура һәм спорт өлкәләрендә һөнәри программаларҙы тормошҡа ашырған дөйөм һәм өҫтәмә белем биреү ойошмаларының айырыуса һәләтле 100 уҡыусыһына ай һайын стипендия бирелә. Стипендияларҙы Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы түләй.

✓5 октябрҙә Башҡортостанда ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртыу буйынса "Йәшел Башҡортостан" акцияһы күҙаллана. Быйыл апрель айында уҙған тәүге акцияла 109 меңдән ашыу ағас һәм ҡыуаҡ ултыртыу ойошторолдо, унда 160 меңдән күберәк кеше ҡатнашты.

✓Үткән аҙнала республика игенселәре ашлыҡты тулайым йыйыу буйынса ике миллионлыҡ сикте үткән. Башҡортостанда 9 сентябргә барлыҡ иген һәм ҡуҙаҡлы иген культуралары майҙандарының 64 проценты йыйып алынған, 2,1 миллион тоннанан ашыу ашлыҡ һуғылған. Төбәктә бер гектарҙан уртаса уңыш 19,8 центнер тәшкил итә, тип хәбәр итә республиканың Ауыл хужалығы министрлығы.

✓Мостай Кәримгә арналған конверт почта әйләнешенә сыҡты. Конвертта Башҡортостан тәбиғәте фонында Мостай Кәримдең портреты төшөрөлгән. Ул шағир, яҙыусы һәм драматургтың 100 йыллығына бағышлап сығарылған. Яңы конверттың тиражы 500 мең дана тәшкил итә.

✓Башҡортостан ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтының Кушнаренко селекция үҙәгендә виноград өлгөргән. Әле үҙәк иртә өлгөрә торған "Ҡарағай", "Мадлен", "Анжевин", "Юбилей", "Алешенькин", "Башҡорт", "Александр", "Стреляев табышы", "Стреляева иҫтәлегенә", "Линьян" сорттарын һата. Бер килограмы 70 һум тора. Селекция үҙәге эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан 5-кә тиклем эшләй.

*ҠЫҪҠАСА*

# ТАШЛАМАЛАР

**Башҡортостанда ҡануниәт тарафынан уҡыусылар тәрбиәләнгән күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр өсөн ташламалар ҡаралған.** Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙан хәбәр итеүҙәренсә, беренсенән, ата-әсә мәктәп формаһын һатып алыуға киткән сығым өсөн компенсация алырға хоҡуклы. Был ташлама менән ике йылға бер тапҡыр файҙаланырға мөмкин. Икенсенән, уҡыусылар мәктәп ашханаһында бушлай туҡлана ала. Тағы бер сара беренселәргә ҡағыла: уларға уҡыу кәрәк-яраҡтары йыйылмаһы, шул иҫәптән артмаҡлы сумка бирелә. Ташлама 18 йәшкә тиклемгә әс һәм унан күберәк бала тәрбиәләнгән, йән башына уртаса килем йәшәү минимумы дәүмәленән артмаған ғаиләләргә бирелә. Ташлама алыу өсөн бала уҡыған мәктәпкә бөтә тейешле документтарҙы килтерергә кәрәк.

✓**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа уҡытыусыларға бюрократик йөкләмәне кәметеү менән шөғөлләнә башланылар.** Мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт комитеты ҡарамағындағы эксперт советы ултырышында уҡытыусыларға төрлө ведомстволарҙың йөкләмәһе лә һалыныуы билдәләнде. "Өҫтә" уларҙың эшмәкәрлеген контролдә тотоу асылында иһә күп һанлы отчет рәүешендәге үҙконтроль менән алыштырылған. Уҡытыусыларға, бынан тыш, методистарҙың эше лә йөкмәтелә", - тип аңлатма бирҙе республика парламенты спикеры Константин Толкачев. Эксперт советы ағзалары "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" федераль законның 6-сы һәм 8-се статьяларына төҙәтмәләр индерергә тәҡдим итте.

✓**Башҡортостандың балалар баҡсалары үҙҙәрендә консультация үҙәктәрен асыу өсөн федераль бюджеттан гранттарға конкурс буйынса һайлап алыуҙа ҡатнаша ала.** Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, урындағы бюджеттан биш процентлыҡ взносты ла иҫәпкә алып, республика ҡаҙнаһынан 20 процент күләмендә берлектә финанслау шарттарында ойошмаларҙың 1 миллион һум алыу мөмкинлеге бар. Субсидиялар мәктәпкәсә йәштәге, шул иҫәптән 3 йәшкә тиклем балаһы булған ата-әсәләргә ярҙам үҙәктәре (хеҙмәттәре) инфраструктураһын булдырыуҙы тәьмин иткән, психологик-педагогик, диагностика, консультация ярҙамы программаларын тормошҡа ашырған проекттар өсөн бүлենә. Ғаризалар 16 сентябргәсә ҡабул ителә. Тулыраҡ - Мәғариф министрлығының рәсми сайтында.

✓**"Роспотребнадзор"ҙа мәктәп йәшендәге балалар өсөн тәҡдим ителгән прививкалар исемлеге менән таныштырҙылар.** Тейешле вакциналарҙың тулы исемлеге ведомствоның рәсми сайтында баҫылған. Тәҡдимдәрҙән сығып, 6-7 йәшкә балаға туберкулездан - бер, пневмококк инфекцияһынан - әс, b тибындағы гемофиль инфекциянан - әс, гепатиттан - әс прививка, грипҡа ҡаршы йыл һайын вакцинация, полиомиелиттан биш прививка, быума йүтәлдән, дифтериянан һәм һын ҡатыу ауырыуынан дүрт прививка, эпидемик паротиттан, ҡыҙылсанан бер прививка кәрәк. Табиптар үҙ ваҡытында яһалған вакцинация һәм ревакцинация баланы инфекциянан һаҡлай һәм дәрестәрҙе ҡалдырыуға юл ҡуймаҫҡа ярҙам итә тип билдәләй.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ДӘҮЛӘТ ДУМАҺЫНДА...

**Октябрҙә Рәсәй Дәүләт Думаһында Башҡортостан көндәре уҙғарыла. Республика Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һөйләүенсә, Рәсәй парламентының түбәнге палатаһында Башҡортостан ҡаҙаныштары күргәҙмәһе ойошторола. Сараның форматы мартта Федерация Советында үткән Башҡортостан көндәренән айырыла.**

"Парламенттың юғары палатаһы төбәктәргә яҡынараҡ һәм шуға унда ошондай саралар ваҡытында Федерация Советы ағзалары алдында төбәк башлыҡтарының сығыш яһауы күҙ уңында тотола, Дәүләт Думаһы практикаһында бер ҡасан да быңдайҙың булғаны юҡ. Башҡортостан көндәре барышында түбәнге палата комитеттарында ҡыҙыҡһынған депутаттар менән аралашыу һәм фекер алышыу булыр тип көтөлә. Программа төҙөлә, был сара республикабыҙға ла, Дәүләт Думаһы депутаттарына ла файҙалы һәм ҡыҙыҡлы булыр", - тип билдәләне Константин Толкачев.

Республика Дәүләт Йыйылышы Рәсәй Дәүләт Думаһы менән тығыҙ эш алып бара. Яҙғы сессияла Башҡортостан депутаттары Дәүләт Думаһына дүрт федераль закон проектын индерҙе. Әлеге ваҡытта Рәсәй парламентының түбәнге палатаһында 14 закон проекты ҡарала, тағы етәүһе - экспертизала. Республика Дәүләт Йыйылышы федераль закон статусын алған закон сығарыу башланғыстары һаны буйынса төбәк парламенттары араһында сираттағы тапҡыр беренсе урынға сыҡты.

# ШАЙМОРАТОВ ВАРИҪТАРЫ

**1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына әҙерлек сиктәрендә "Шайморатов вариҫтары" тип аталған халыҡ проектына старт бирелде. Уның барышында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары тураһында мөмкин тиклем тулыраҡ исемлек туплау һәм уны биографик мәғлүмәт менән тулыландырыу күҙаллана.**

Республика халҡын музейҙар, мәктәптәр, ғаиләләр архивтарында һаҡланған мәғлүмәт менән бүлешергә саҡыра был акция. Тыуған ил өсөн һуғышта ҡатнашҡан туғаны иҫтәлеген хөрмәтләп, һәр кем фотографиялары, тарихы менән уртаҡлаша ала. "Проект Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының ҡаһарман яугирҙары - шайморатовсыларҙың иҫтәлеген мәңгеләштереүгә йүнәлтелгән. Быға тиклем дивизияның беренсе саҡырылыш яугирҙарының биографик мәғлүмәттәрен йыйыу һәм туплау буйынса бер ниндәй эш алып барылманы, әлегәсә тәүге 3823 яугирҙың исемлеге юҡ", - ти проекты ойоштороусылар.

Тупланған мәғлүмәттәр буйынса, "Шайморатовсылар - легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары" тип аталған биографик белешмә әҙерләп сығарыу күҙаллана. Бынан тыш, акция барышында яугирҙарҙың кесе ватанында иҫтәлекле таҡтаташтар асыласаҡ, мәктәптәрҙә, музейҙарҙа стендтар эшләнәсәк; Рәсәй Федерацияһы субъекттары һәм БДБ илдәре менән телерадиомарафондар, телекүперҙәр ойошторолаcаҡ. Шулай уҡ республика буйынса авто- һәм атлы йөрөш үткәреү, 9 Майҙа "Үлемһеҙ полк" акцияһында Башкавдивизия вариҫтарынан айырым отряд йыйыу планлаштырыла. Анкеталар "Бәйләнештә" социаль селтәрендә һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы сайтында бар. Уны тултырғас, shaymuratov120@yandex.ru электрон почтаһына йәки почта аша 450015, Өфө, Революцион урамы, 43, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ("Шайморатовсылар" акцияһы) адресына ебәрергә кәрәк. Проектты ойоштороусылар - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, БР район һәм ҡалалары хакимиәттәре, БР Милли музейы, Республика Хәрби дан музейы, йәмәғәт, ирекмәнлек һәм милли-мәҙәни ойошмалар.

# ЭШҠЫУАРҒА ЯРҘАМҒА

**"Торатау" конгресс-холында эшҡыуарҙар өсөн берҙәм клиент офисы форматында эшләүсе "Минең бизнесым" үҙәге асылды.**

Билдәләнеүенсә, бында ресурс менән тәьмин итеүсе ойошмаларҙы бер урынға туплаған проект офисы эшләйәсәк. Эшҡыуарға берҙәм тәҙрә режимында объект төҙөүгә, уны файҙаланыуға тапшырыуға һәм селтәргә тоташтырыуға рөхсәт алырға була. Шәхси финанс консультанттары үҙ эшен башланы ла инде. "Минең бизнесым" үҙәгенә мөрәжәғәт иткән һәр кем кесе һәм урта предприятиеға финанс ярҙамы, финанс планлаштырыуы, маркетинг оҙатыуы, мәғлүмәт һәм юридик оҙатыу мәсьәләләре буйынса консультация алыуҙан тыш, белемен дә арттырырға мөмкин. Мәҫәлән, яңы эш башлаған эшҡыуарҙар өсөн ҡыҫҡа ваҡытлы белем биреү программалары, төрлө семинарҙар һәм тренингтар ойошторола. Радий Хәбиров эшҡыуарҙар һәм муниципалитеттарҙың тәғәйенләнгән "бизнес-шериф"тары менән аралашҡанда ҡала һәм район хакимиәттәре башлыҡтарының эшҡыуарлыҡ буйынса урынбаҫарҙары бизнес менән бер тулҡында булырға, уларҙың мәнфәғәттәрен яҡларға тейешлеген билдәләгәйне. "Һеҙҙең төп бурысығыҙ - бизнесты үҫтереү. Һеҙ районығыҙҙың эшҡыуарҙары өсөн атай йәки әсәй булырға, һәр аныҡ осраҡта уларҙың мәнфәғәттәрен яҡларға тейешһегеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров. "Минең бизнесым" үҙәктәре - эшҡыуарлыҡ башланғыстарына өҫтәмә ярҙам бирергә, ошо йүнәлештә "күҙатыргә" бурысы ике ҙур инфраструктура объекты. Планыбыҙ шундай: бизнесҡа, инфраструктура проекттарына, индустриаль парктарға булышлыҡ итеү өсөн бюджетта күберәк аҡса һалырбыҙ. Шуға күрә башҡа ҙур ҡалаларҙа шундай үҫеш нөктәләре барлыҡҡа килһен өсөн уйларға кәрәк", - тине Башҡортостан етәксеһе.

# ИНТЕРНЕТЛЫ БУЛАЛАР

**Башҡортостанда "Һанлы иҡтисад" милли программаһы буйынса алыҫтағы күп кенә ауылдарға юғары тиҙлекле интернет килә. Мәктәптәр, ФАП-тар, полиция бүлексәләре, янғын частары, һайлау комиссиялары һәм башҡа социаль әһәмиәтле объекттар интернетҡа тоташтырыла.**

"Социаль әһәмиәтле учреждениелар интернетҡа федераль бюджет аҡсаһына Рәсәйҙең Һанлы үҫеш, элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығы менән "Башинформсвязь" йәмғиәте араһындағы дәүләт килешеүе сиктәрендә тоташтырыла. Башҡортостанда социаль әһәмиәтле объекттарҙы тоташтырыу федераль ҡаҙнаға 1,7 миллиард һумға төшә", - тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһының Мәғлүмәтләштереү буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Геннадий Разумикин.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала Советына өҫтәмә һайлау һөҙөмтәләре буйынса 8-се бер мандатлы һайлау округында "Берҙәм Рәсәй"-ҙән Артур Хромец - "ГенСтройТрест" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директоры, 14-се округтан "Компания Потенциал" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтен ойоштороусы Эдуард Остапчук еңеү яуланы. Яңы депутаттарға мандаттар 11 сентябрҙә ҡала Советының 44-се ултырышында тапшырылды.

✓15 сентябрҙә Иван Якутов исемендәге мәҙәниәт паркында "Азия көйҙәре һәм ритмдары" Азия халыҡтарының милли мәҙәниәттәре фестивале уҙғарыла. Сара Башҡортостан Республикаһы Халыҡтар дуҫлығы йорто ойошторолоуҙың 25 йыллығына арнала. Фестиваль көндөҙгө сәғәт 1-ҙә башлана. Ойоштороусылар - БР Мәҙәниәт министрлығы, Халыҡтар дуҫлығы йорто, Башҡортостан Республикаһы халыҡтары ассамблеяһы, Өфө ҡалаһының Совет районы.

✓Өфөлә Фәйзи Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре ансамбле социаль селтәрҙә #БашҡортсаБейейем флешмобын башлап ебәрҙе. Проектта ҡатнашыу өсөн башҡорт бейеүен бейергә һәм уны #башҡортсабейейем, #башҡортсабейергәойрәнәм хэштегы менән интернетҡа һалырға кәрәк. Флешмоб башҡортса бейергә өйрәтеү һәм уны йәштәр араһында популярлаштырыу өсөн уҙғарыла.

✓Өфө ҡалаһы хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә төп темалар булып хәрби хеҙмәткә көҙгө саҡырылыш һәм ҡала территорияһын санитар таҙартыу айлығы мәсьәләләре торҙо. Әлеге ваҡытҡа призыв йәшендәге 5740 кеше иҫкәртелһә, комиссияға барлығы 5599 егет килә. Көҙгө саҡырыу 1 октябрҙән башлана. Көҙгө санитар айлығына килгәндә, ул 10 сентябрҙән 14 октябргә тиклем дауам итә. Дөйөм ҡала өмәләре - 21 сентябргә һәм 5 октябргә, "санитар йомалар" аҙна һайын планлаштырылған.

✓Ҡаҙан менән Өфө араһында тура тимер юл бәйләнеше тергеҙелә. Маршрут 2019 йылдың 9 декабренән йөрөй башлай, тип яҙылған Рәсәй тимер юлдары теҙмәһендә. Ҡаҙандан Өфөгә - таҡ, ә кире йүнәлештә йоп көндәрҙә барып етергә мөмкин. Юлға 21 сәғәт тирәһе китә. Ҡаҙан - Һамар, Мәскәү - Силәбе, Өфө - Санкт-Петербург, Һамар - Ҡаҙан поездарының күсеп ултырмай торған вагондары йөрөтә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Проектҡа инвестор 700 миллион һум аҡса һалырға һәм 90 эш урыны булдырырға ниәтләй. Океанариумдың "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында урынлаштырылыуы ҡарала. Уны тормошҡа ашырыу киләһе йылға планлаштырылған.*



Килешеү шарттарына ярашлы, өс йыл дауамында республиканың 2774 социаль әһәмиәтле объекты интернетҡа тоташтырыла. Әйтәйек, быйыл 722 объектты йәки социаль әһәмиәтле объекттарҙың дөйөм һанынан 26 процентты интернетҡа тоташтырыу күҙаллана. Киләһе йылда тоташтырылған объекттар һаны 888-гә етергә тейеш. 2021 йылда 1164 социаль әһәмиәтле объектты (40 проценттан ашыу) интернетҡа тоташтырыу күҙаллана. Эштәр тамамланғас, элемтә операторының төҙөлгән инфраструктураһы ошо уҡ ауылдарҙа физик һәм юридик берәмектәрҙе интернетҡа тоташтырыу өсөн файҙаланыуы күҙ уңында тотола. "Рәсәй Федерацияһының һанлы иҡтисады" милли программаһы ил президенты Владимир Путиндың май указы менән башланды. Социаль әһәмиәтле проекттарҙы интернетҡа тоташтырыу "Һанлы иҡтисад" милли программаһының "Мәғлүмәт инфраструктураһы" проекты сиктәрендә ғәмәлгә ашырыла.

## ИҠТИСАДИ ТӨБӘК

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров республиканың Ишембай һәм Стәрлетамаҡ райондарында "Алға" махсус иҡтисади зона булдырыуға ғаризаһына ҡул ҡуйҙы. Тиҙҙән документтарҙы Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығына ҡарауға ебәрәләр, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәтенән.**

Ведомство-ара эшсе төркөм Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса махсус иҡтисади зона статусын алыуға ғариза төҙөгән. Уның составында - республика Хөкүмәте, Иҡтисади үҫеш министрлығы, власть органдары, шулай уҡ муниципалитет хакимиәттәре вәкилдәре. Идарасы компанияның бурысы Башҡортостандың Үҫеш корпорацияһына йөкмәтелгән. Махсус иҡтисади зонаға ҡараған дүрт участкаының дөйөм майҙаны (һәр районда икешәр) - 468,8 гектар. Биләмәне үҙләштереү өсөн бында республика булышлығында электр, газ һәм һыу менән тәьмин итеү селтәре, автомобиль һәм тимер юл транспорты өсөн инә торған юлдар төҙөйәҙәр. Ете потенциаль резидент махсус иҡтисади зона биләмәһендә инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу ниәттәрен рәсланы ла инде. Улар - нефть химияһы, приборҙар эшләү, аҙыҡ-түлек сәнәғәте предприятиелары. Республика Хөкүмәте бөтә инвесторҙар менән тейешле килешеүҙәр төҙөгән. Республика етәксеһе билдәләүенсә, Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостандың ғаризаһын хупларға әҙер. Бынан алда был башланғыс Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев менән осрашыуҙа тикшерелде.

## ҠАЛАЙ БАЙБЫҪ!

**Башҡортостанда 2018 йылда 6,8 тонна алтын һәм 41,6 килограмм бөртөклө ҡиммәтле металл сығарғандар. Экология министрлығының тәбиғәт ресурстары һәм тирә-яҡ мөхит торошо тураһында дәүләт докладында ошо хаҡта хәбәр ителә.**

Башҡортостанда 321 ҡаты файҙалы ҡаҙылмалар ятҡылығы, 264 - мәғдән, 67 мәғдән булмаған ятҡылыҡтар теркәлгән. Былтыр 4,1 миллион тонна баҡырлы мәғдән, 69,7 тонна көмөш, 3 миллион тонна аш тоҙо, химик етештереү өсөн - 2,5 миллион тонна, цемент етештереү өсөн 1,8 миллион тонна эзбиз, 385 мең тонна гипс, 441 мең тонна балсыҡ, 103 мең кубометр гранит, 12 мең тонна тальк сығарылған. 2019 йылдың 1 ғинуарына ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, 209 нефть һәм газ ятҡылығы теркәлгән. 2018 йылда "Башнефть", "Лукойл-Пермь", "Ингеохолдинг" сеймал сығарыу менән шөғөлләнгән. Ер аҫтынан 16,1 миллион тонна нефть сығарылған. "Башнефть" компанияһының төп табыш күләме - 15,8 миллион тонна. Ҡалдыҡ запастар - 443 миллион тонна. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, ошондай күләмдә сығарғанда, нефть 27 йылға етергә тейеш. Башҡортостанда һоро күмерҙең запасы 250 миллион тоннанан ашыу тәшкил итә. Көньяҡ Көйөргәҙе, Көйөргәҙе, Кривлев, Маяҡ һәм Бабай ятҡылыҡтары эшләй.

## ҠЫҪҠАСА

## ТИКШЕРЕЛЕП ТОР!

**Башҡортостанда "Сәләмәтлек поезы" акцияһы барышында 78 мең кеше тикшереү үтте.** 14 туберкулез, 40-тан ашыу раҫланған яман шеш осрағы асыҡланды, бер нисә мең кеше "шәкәр диабеты" диагнозы менән иҫәпкә ҡуйылды. 150 кеше - Өфө кардиология үҙәгендә дауаланырға, 300-өнә Өфө дауаханаларында юғары технологиялы медицина ярҙамы күрһәтелергә тейеш. Стоматология модулдәре лә юғары һөҙөмтәлелек күрһәтте, мотлаҡ медицина страховкаһы фонды аҡсаһы иҫәбенә уларҙа 500 ауыл кешеһе дауаланды. "Әлегә дүрт районға ғына бармай ҡалдыҡ, ләкин 1 октябргә тиклем тотош республикала йөрөп сығырбыҙ", - тип һөйләне һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин.

✓ **Бер миллиондан ашыу халыҡ йәшәгән ҡалалар араһында иң бәләкәй бер бүлмәле фатирҙарҙы Өфөлә төҙөйҙәр.** Башҡортостандың баш ҡалаһында бер бүлмәле фатирҙың уртаса майҙаны - 36,3 квадрат метр, ә уртаса хаҡы 2 278 094 һум тәшкил итә, тиелә Domofond.ru рейтингында. Ә иркен бер бүлмәле фатирҙар - Силәбелә. Яңы йорттарҙа уларҙың уртаса майҙаны - 42,7 квадрат, ә хаҡы - 1 807 912 һум. Артабан Һамар килә - 42,3 квадрат метр өсөн 2 266 821 һум һорайҙар. Мәскәүҙә 40,4 квадрат өсөн 8 297 873 һум бирергә тура килһә, Санкт-Петербургта майҙаны 38,5 квадрат метрлыҡ фатирҙы уртаса 4 711 686 һумға һаталар. Миллионлы ҡалалар араһында өсөнсө урынды Екатеринбург алды, унда бер бүлмәле фатирҙың уртаса майҙаны 40,7 квадрат метрға тиң, ә хаҡы - 3 183 029 һум.

✓ **Ҡала хакимиәтендә уҙған "Инвестсәғәтте" Өфө территорияһында океанариум төҙөү проекты менән "Водный мир" яуаплылығы сикләнгән ширҡәттең генераль директоры Сергей Кузнецов сығыш яһаны.** Ул дүрт кимәлле ҡунел асыу комплексынан торорға тейеш. 700 кеше ултырырлыҡ дельфинарий булыуы, сөсө һыуҙа йәшәгән балыҡтарҙан торған аквариумдар зонаһы, тропик ботаника баҡсаһы, һөйрәләүселәр - крокодилдар, гәбөргәйелдәр, быуар йыландар һәм анакондалар урынлаштырылған 15 террариум һәм вольер булдырыу планлаштырыла. Проектҡа инвестор 700 миллион һум аҡса һалырға һәм 90 эш урыны булдырырға ниәтләй. Океанариумдың "Кашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында урынлаштырылыуы ҡарала. Уны тормошҡа ашырыу киләһе йылға планлаштырылған.

✓ **Баш ҡалала 21 сентябрҙә таҙалыҡ көнө үтәсәк.** Был акцияны экологик донъяға ҡараштыпопулярлаштырыу, экологик белемде үҫтереү өсөн БР Тәбиғәттән ҡулланыу һәм экология министрлығы иғлан итә. Акцияның бурыстарының береһе - тирә-яҡ мөхитте ҡалдыҡтар менән сүпләү проблемаһына етди иғтибар йәлеп итеү, был мәсьәләне төбәк операторҙары һәм ҡалдыҡтар менән эш итеүҙә яңы тармаҡ булдырып системаһы хәл итеү йүнәлешендә эшләү. Акцияны ойоштороусылар алдарына ҙур маҡсат ҡуйған - был сараға Башҡортостандың 200 мең (халыҡтың 5 проценты) граждандың йәлеп итеү һәм һәр биләмәлә таҙартыу эштәре алып барыу. Акция иртәнге 10-да башлана.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ҠЫТАЙҘЫҠЫН АЛМА!

**Августан Россельхознадзор Ҡытайҙан груша һәм персик индереүҙе туҡтатты.** Сәбәбе - емеш-еләктә зарарлы ҡортоҡостар табылыуының йышайыуы. Бынан тыш, был илдән слива, нектарин, абрикос, алыча, сейә, һары сейә, алма һәм айва алыу тыйыласаҡ. Ведомство зарарлы емеш-еләк тураһында бер нисә тапҡыр Ҡытайға мәғлүмәт ебәргән, шулай уҡ тауарҙы етештереү, һаҡлау һәм төргәкләү урындарына инспекция үткәреү тәҡдим ителгән. 1990 йылдарҙа Ҡытайҙан емеш-еләк ябайлаштырылған юл буйынса индерелгән. Йәғни, уларҙың ҡайҙа етештерелеүенә артыҡ иғтибар бирелмәгән. Ҡытай бөгөнгө көндә Рәсәйҙе йылына 900 мең тонна үҫемлекселек продукцияһы, шул иҫәптән 180 мең тонна цитрус емештәре, 190 мең тоннанан ашыу алма, груша, слива, нектарин, абрикос, персик менән тәьмин итә.

## ҮҘАЛЛЫ ТЕРКӘ

**Рәсәй халҡына автомобилдең теркәү номерҙарын әҙерләүселәрҙән үҙаллы алыу мөмкинлеге асыла.** Ошо арала Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған яңы закон 2020 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инә. Хәбәр итеүҙәренсә, дәүләт знактарын бирел теркәү үтергә һәм һуңынан уларҙы әҙерләүселәрҙән үҙаллы барып алырға ла мөмкин. Законға ярашлы, теркәү мәғлүмәттәрен боҙоп күрһәтеү һәм дәүләт теркәү ҡағыҙҙәрен боҙған өсөн компаниялар яуап бирәсәк. Шулай уҡ транспортты теркәүҙе хужаһы үҙе үткәрмәгән осраҡта, уның паспортын күрһәтеү мотлаҡ. Июнь айында закон проекттары буйынса комиссия автомобилгә хужаһы теркәлгән төбәктең дәүләт номерын биреү тураһындағы проектты хупланы. Тамғаны йәшәгән урында ла алып була, әммә дәүләт номеры мотлаҡ автомобиль хужаһының прописка адресы менән тап килергә тейеш.

## ПЕНСИЯҒА ӨҪТӘМӘ

**Рәсәйҙә төбәктәрҙә пенсияларға социаль өҫтәмәләр түләү тәртибен билдәләнеләр.** Сираттағы финанс йылына пенсионерҙың төбәктәге йәшәү минимумы дәүмәле билдәләнергә тейешле берҙәм ҡағыҙәләр әҙерләнгән. Өҫтәмә социаль ярҙам күләме шуға бәйле. Ул аныҡ төбәктәге хәлде иҫәпкә алып түләнә һәм пенсионерҙың илдәге - ағымдағы йылдың тәүге ике кварталындағы йәшәү минимумына иҫәп тотола. Был пенсионерҙың төбәктәге йәшәү минимумы дәүмәлен нигеҙһеҙ түбәнәйтеүгә юл ҡуймаҫҡа тейеш. Ул пенсионерҙарға социаль ярҙамдың уртаса кимәлен арттырыр тип көтөлә. Башҡортостанда быйыл IV кварталда айлыҡ йәшәү минимумы дәүмәле эшкә һәләтле халыҡҡа - 9355 һум, хаҡлы ялдағыларға - 7193 һум, балаларға 8723 һум тәшкил итә. Уртаса күләме - 8784 һум.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Күҙ ҡабағындағы арпа

❖ 10 грамм еҙ төймә үләне сәскәләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, 10 минут талғын утта ҡайнатырға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан яртыы сәғәт алда 50-шәр мл эсергә.

### Сәтләүек

❖ Көн һайын сәтләүек ашау ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итә. Сәтләүектең үҙегеҙгә оҡшаған төрөн ашағыҙ, бында сикләүҙәр юҡ.

### Баш ауыртыуы

❖ Лимон ҡабығын эске яғы менән сикәләргә баҫырға. Тиҙҙән лимон аҫтында ҡыҙыл тап барлыҡҡа киләсәк, ул яндыра, ҡысыта башлаясаҡ. Әммә баш ауыртыуы баҫыла.

❖ Мигрень мәлендә 1 стакан ҡайнар һыуға ярты ҡалаҡ бөтнәк һалырға, 15 минут һыу ҡайнап ултырған кәстрүлдә тоторға. Һыуынғас, һөҙөргә һәм стакан тулғансы һыу өҫтәргә. Көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда яртышар стакан эсергә.

### Түште дауалау

❖ Түш шешкәндә бәпембә файҙалы. Яңы ғына ҡаҙып алынған бәпембә тамырын ҡырғыстан үткәреп, шешкән түшкә ябырға. Шулай уҡ ҡултыҡ аҫтындағы, саттағы шештәрҙе лә яҡшы дауалай.

### Быуындағы тоҙ

❖ Быуындарға ултырған тоҙҙан хәрәкәтләнеү ауыр була башлай, шешеүҙәр барлыҡҡа килә, артрит, артроз ға һ.б килтереүе ихтимал. Организмды тоҙҙарҙан таҙартып торорға кәрәк. Тигеҙ күләмдә алынған грейпфрут, сельдерей, кишер, шпинат һутын, йәиһә грейпфрут, сельдерей һәм ҡайын һутын алып, даими эсеү файҙалы. Грейпфрут һуты органик булмаған кальцийҙы иретә, тап ул кимерсәктәрҙең ҡатыуына килтерә. Ҡайын һуты организмдан һейҙек кислотаһы тоҙҙарын сығара.

### Теш ҡаҙнаһы

❖ Теш ҡаҙнаһын дингеҙ тоҙо нығыта. Көнөнә 1 тапҡыр теш ҡаҙнаһын тоҙ менән ышҡығыҙ, улар ҡанауҙан туҡтаясаҡ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Менюҙы махсус белгестәр - технологтар, диетологтар төҙөй. Рецепттар тупланмаһында ризыҡтарҙың атамаһы яҙыла, ашнаҡсылар уларҙы теүәл үтәргә тейеш. Тоҙҙан башҡа бер ниндәй тәмләткес ҡушылмай.*



*ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!*



## БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Оҫтараҡ балаҫ һуғыусылар XX быуат уртаһында "йондоҙ" биҙәген төрлө төҫтәр ҡулланып һуға. Бер биҙәктә ҡушарлап ике, дүртәр төҫ ҡулланыла. Миәкә районы Илсеғол ауылының хәҙерге көндә Рәсәй этнография музейында һаҡланған балаҫында һәр 8 йондоҙ биҙәктә ошо фигурала ғына ҡулланылған төҫтәр күрәбеҙ.**

Ситтәре йәшел һәм һары төҫ менән билдәләнгән йондоҙҙарҙың эске өлөшөндә һоро, һары ҡыҙыл, шәмәхә, аҡ таждар ҡулланыла; һары ҡыҙыл ситле йондоҙ бер осраҡта - һоро, һары, ҡурай еләге төҫө, зәңгәр, икенсеһендә - ҡыҙыл, һары, йәшел, алһыу; ике алһыу контурлы биҙәктә ҡыҙыл, һары ҡыҙыл, һары, йәшел; ҡыҙыл, һары ҡыҙыл, аҡ, шәмәхә төҫтәре үҙ-ара тап килтереп һуғыла. "Төҫтәр сағылышы" бигерәк тә Миәкә районы өсөн хас. Ҡасандыр Ағиҙел аръяғындағы кеүек үк, бында ла сағыу итеп һуғылған балаҫтарҙың ситке өлөшө лә ромб биҙәкле декоратив ҡайма менән биҙәлгән.



*Миәкә районы Илсеғол ауылы балаҫы. Г. Мөхәмәтшин һүрәте. 1960*

Төбәктең был үҙәгенән йырағыраҡ ятҡан ауылдарҙа "йондоҙ" орнаменты балаҫта ҡулланылһа ла, уның ситтәрен башҡа төҫ менән айырмағандар. Киреһенсә, "йондоҙ" биҙәктәрҙең араһын башҡа берәй төҫ менән тултырып, үҙенсәлекле ромбтар барлыҡҡа килтергәндәр. Бындай балаҫтар Нестеров исемендәге Башҡорт художество музейы фондында бар. Ҡыҙыл төҫтәге ромбтар еләк кеүек тамылйып тора. Орнамент ҡара төҫтәге контур һәм тура мөйөштәр, шулай уҡ өҙөк таҫмалар менән көсәйтелгән. "Йондоҙ" мотивы икенсе планға ҡалып, шул тиклем баҫылған, ул хатта ҡорама итеп ҡоролған фонға оҡшап китә.





*Әлшәй балаҫтары. Автор фотоһы. 1963*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА*

# ЭШ ТУҠМАҒЫ - АШ!

## Белем алыуҙыҡы ла...

**Алдан хәбәр ителеүенсә, яңы уҡыу йылында баш ҡаланың барлыҡ белем усаҡтарын да бер оператор - "Балалар һәм диетик туҡланыу үҙәге" хеҙмәтләндерәсәк. Рационға витаминдар, микроэлементтар менән байытылған ризыҡтарҙың индерелеүе уҡыусыларҙың туҡланыу үҙенсәлеге булып торасаҡ.**



Уҡыу йылы башланыу менән баш ҡаланың әле яңы ғына файҙаланыуға тапшырылған 162-се "Смарт" күп профилле полилингваль мәктәбендә белем биреү ойошмаларында туҡланыу сифатына арналған матбуғат конференцияһы уҙҙы. Сарала киң мәғлүмәт саралары журналистарынан тыш, балалар туҡланыуы өсөн яуаплы тармаҡтар вәкилдәре лә ҡатнашты һәм һәр береһе үҙ бурысы тураһында аңлатма бирҙе.

Билдәләнеүенсә, баш ҡалала яңы системаға 129 мәктәп һәм 228 балалар баҡсаһы күскән дә инде. Күп нәмә үҙгәргән: меню, түләү ысулы, аҙыҡ-түлекте һатып алыу, сифат стандарттары, контроль һәм хатта һауыт-һабаның дизайны. Аныҡлап әйткәндә, быға тиклем Өфөлә өс муниципаль оператор булып, ҡала мәктәптәрендә туҡланыу хәл-торошон анализлай башлағас, уларҙың барыһында ла бер үк проблемалар булыуы асыҡлана: аҙыҡ-түлек блоктарының матди-техник базаһының иҫкереүе, туҡланыуҙы ойоштороуға төрлөсә ҡараш, төрлө меню. Шулай уҡ берҙәм стандарттар булмағанлыҡтан, һатып алған аҙыҡ-түлектең, әҙерләнгән ризыҡтың сифатына ҡарата ла һорауҙар тыуа. Шуға күрә ҡала етәкселеге өс предприятиены ла бер муниципаль операторға берләштерергә ҡарар итә. Һөҙөмтәлә меню ғына түгел, хатта һауыт-һаба ла, персоналдың кейеме лә бер стандартҡа килтерелә.

### Кем иҫәбенә?

Башҡортостан Республикаһы Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Алексей Гусев белдереүенсә, туҡланыу структураһын яҡшыртыу бюджет йәки ата-әсәләр иҫәбенә түгел, ә оптималләштереү иҫәбенә тормошҡа ашырыласаҡ. Республика етәкселеге ҡарары менән был система Башҡортостан буйынса индереләсәк. Бөгөн туҡланыуҙы ойоштороуҙың ике формаһы бар: аутосорсинг һәм мәғариф учреждениеһының был хеҙмәтте үҙе башҡарыуы. СанПиН талаптарына ярашлы, туҡланыу балаларға ашарға яраҡлы ризыҡтар исемлеге булған кулинар белешмә нигеҙендә тормошҡа ашырыласаҡ. Йәғни тыйылған ризыҡтар ҡулланылмаясаҡ.

### Меню

Менюҙы махсус белгестәр - технологтар, диетологтар төҙөй. Рецепттар тупланмаһында ризыҡтарҙың атамаһы яҙыла, ашнаҡсылар уларҙы теүәл үтәргә тейеш. Тоҙҙан башҡа бер ниндәй тәмләткес ҡушылмай. Аҙыҡты ҡыҙҙырыу, пассировка кеүек ысулдар ҡулланырға ярамай. Бары тик бешереү, быҡтырыу, ҡамырға төрөп бешереү генә мөмкин. Менюҙың дүрт варианты ҡарала: беренсе иртәнге аш - һөт ризыҡтары, ит продукттарынан торған туҡлыҡлы иртәнге аш, төшкө аш һәм икенде ашы. Көн дауамында бала бер нисә вариант ризыҡ ашай. Мәктәптәрҙә швед өҫтәле булмаясаҡ, сөнки баланың үҙенә һайлау мөмкинлеге бирһәң, ул көн һайын макарон, йәғни сәләмәт туҡланыу, туҡланыу мәҙәниәте ҡағиҙәләренә ҡаршы килгән ризыҡ ҡына ашауы ихтимал.

### Меню төҙөү үҙенсәлектәре

Ике көн йәнәштән һыйыр йәки тауыҡ итенән бешерелгән ризыҡ биреү тыйыла. Меню 10 көнгә төҙөлә һәм ошо көндәр дауамында бер ризыҡ та ҡабатланмай. Был артып ҡалған ризыҡты икенсе көндә ҡулланмау өсөн эшләнә. Ризыҡ бешергәндә һыйыр малы ите, тауыҡ, балыҡ, эс-ҡарын ҡулланылырға тейеш. Айырым ведомоста бала билдәле ваҡытта күпме май, аҡһым, углевод, витамин алырға тейешлеге күрһәтелә. Әйткәндәй, балаларға өйҙән ризыҡ килтереү тыйылмай, әммә уны улар ашханала ғына ашарға тейеш.

### Ризығы һыуыҡ булмаһын

Мәғлүм булыуынса, күмәк балаға өҫтәл әҙерләгәнсе, улар һыуынып та өлгөрә. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн махсус йылы тележкалар алынасаҡ һәм улар зал буйлап йөрөтөләсәк. Һөҙөмтәлә балалар һәр ваҡыт йылы аш менән тәьмин ителәсәк.

### Түләү нисек буласаҡ?

Өфө ҡалаһының "Балалар һәм диетик туҡланыу үҙәге" директоры Марина Әсфәндийәрова белдереүенсә, льготалы категорияға ингән балалар (аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләргә һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балалар) муниципаль задание буйынса бушлай ашатыласаҡ. Бының өсөн мәктәптәр уларҙың һанын күрһәтеп, операторға ғариза бирергә тейеш. Ата-әсәләрҙән күпме аҡса йыйыу Өфө ҡала хакимиәте ҡарары менән билдәләнә. Бөгөнгә 7-11 йәшлектәр өсөн иртәнге аш 55 һумдан да кәм булырға тейеш түгел, төшкө аш - кәмендә 60 һум. Өлкән синыфтар өсөн иртәнге аш - 60 һумдан да кәм түгел, төшкө аш - 70 һумдан да кәм түгел, икенде ваҡыты ашы- 22 һум.

### Уҡыусы картаһы

"Социаль карталарҙың Башҡортостан регистры" акционерҙар йәмғиәте генераль директорының беренсе урынбаҫары Әлфир Хәлитов белдереүенсә, хәҙер туҡланыу өсөн түләү ҡулаҡсалата түгел, ә карточка аша башҡарыласаҡ. Уҡыусы картаһын "Һаҡлыҡ банкыһы", "Уралсиб", "Рәсәй почтаһы" бүлексәләрендә, шулай уҡ Сбербанк-онлайн аша йәки мәктәптәргә махсус ҡуйыласаҡ терминалдар аша тулылындырырға мөмкин буласаҡ. Картаны барлыҡ уҡыусылар ҙа мәғариф бүлегенә бирелгән ғаризаларға ярашлы ала. Матбуғат конференцияһы үткән көнгә барлығы 350 мең картаға ғариза бирелгән. Беренсе тапҡыр алғанда - карта бушлай. Уҡыусы уны юғалтҡан осраҡта яңы карта алыр өсөн ата-әсәләргә call-үҙәк аша Социаль карталарҙың Башҡортостан регистрының техник ярҙамына мөрәжәғәт итергә һәм 50 һум түләргә кәрәк. Был карта банк картаһына оҡшаш, шуға күрә уны юғалтҡан осраҡта, регистрҙың тура бәйләнеш телефонына шылтыратып, картаны яптырырға кәрәк.

Уҡыусыларға уңайлы һәм ышаныслы булһын өсөн карта функциялары булған беләҙектәр һәм брелоктар эшләнгән. Уларҙы алыу өсөн ата-әсәләргә ғариза яҙырға кәрәк. Беләҙек - 200, брелок 150 һум тора. Әгәр ниндәйҙер сәбәптәр менән ата-әсә баланың туҡланыуы өсөн түләмәһә, баланы барыбер ашатасаҡтар, ул ас йөрөмәйәсәк, әммә был ваҡыт 10 көн генә дауам итә. Картаға аҡса һалыу менән ул берҙәм туҡланыуҙы ойоштороу операторына күсә һәм күренеп тора. Уҡыусы картаһы шулай уҡ транспортҡа лә бәйле һәм шул уҡ принцип менән эшләй, йәғни уның менән транспортта ла иҫәпләшергә мөмкин. Транспортта бындай карта менән ҡулланыусы уҡыусылар өсөн льготалар ҡаралған.

### Контроль

Башҡортостанда туҡланыу сифаты өлкәһен контролләүҙе яҡшыртыу өсөн октябрҙән муниципалитет башлыҡтары рейтингына ике критерий өҫтәлә: мәктәпкәсә һәм мәктәп учреждениеларында туҡланыу сифаты. Өфөнөң "Балалар һәм диетик туҡланыу үҙәге"ндә ҡыҙыу бәйләнеш булдырыласаҡ, шулай уҡ инспекция бүлеге эшләйәсәк. Инспекторҙарҙың бурысы - һәр көн балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә булып, туҡланыуҙы ойоштороу, СанПиН нормаларының үтәлешен тикшереү. Бынан тыш, БР Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау дәүләт комитеты республика кимәлендә айырым инспекторҙар подразделениеһын булдырырға планлаштыра. Улар прокуратура, Роспотребнадзор хеҙмәткәрҙәре менән берлектә төбәк буйынса йөрөп, туҡланыу буйынса хәл-торош менән танышасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Матбуғат конференцияһында шулай уҡ аллергия менән яфаланыусы, сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән категория балалар өсөн айырым меню төҙөү мәсьәләһе лә ҡаралды. Матбуғат саралары вәкилдәре иһә өс көнлөк меню буйынса әҙерләнгән ризыҡты тәмләп ҡараны.**

✓ *Улай булмаһа, беҙҙең халҡыбыҙ keүек үк ирек һөйөүсе, яугир, ғорур һәм баш бирмәҫ булып танылған ирландтарҙа "башҡорт һағышы" тип атап булған феномен бер ҡасан да, бер кемдең дә күңелен биләмәҫ ине.*



ТАМЫРҘАРҘЫ ЮЛЛАП...

**Йәш саҡта алыҫ илдәр, мажаралы сәйәхәттәр, батырлыҡ күрһәтеү, күркәм ҡаҙаныштарға өлгәшеү тураһында хыялланмаған кеше лә булмайҙыр. Күрәһең, хәҙерге быуындарҙың аҫҡы, боронғо аңында ҡасандыр меңәр йылдар әүәл тыуған-үҫкән ерҙәренән халыҡтарҙың бөйөк күсеше дәүерҙәрендә сығып китеп ғәйеп булған ҡан-ҡәрҙәштәре тураһындағы образдар һәм хис-кисерештәр шул рәүешле пәйҙә булалыр. Хәҙерге Европа милләттәренең күп быуаттар буйына ошо ҡитғаға килеп-китеп торған төрлө ҡәүемдәрҙән формалашҡанын тарих фәне лә инҡар итмәй. Халыҡтарҙың һинд-европа төркөмөнә ҡараған испан һәм рустарҙың ата-бабалары ла донъя башынан бирле әле билгән ерҙәрендә йәшәмәгән бит һәм уларҙың, ниндәйҙер пассионар талпыныш һөҙөмтәһендә айырылышып, Евразия далаларынан хәҙерге Европаның төрлө тарафтарына барып юлығыуы бик мөмкин.**

# ӘЙТ ӘЛЕ, ГӨЛНӘЗИРӘ,

## ҡайҙан һуң ирланд ҡыҙында башҡорт һағышы?

Әбына башҡорт кешеһенең юйыла барған хәтер төпкөлөндә ошондай боронғо донъяуи кисерештәр шауҡымы, йәғни тарихи һағыш йәшәйме икән? Йәшәйҙер, тим, сөнки арабыҙҙа халҡыбыҙҙың этник тамырҙарын сал тарих төпкөлөнән эҙләүселәр, башҡорт этносын Ер шарындағы иң боронғо ҡәүемдәрҙең береһе булыуын раҫлаусылар күбәйгәндән-күбәйә бара бит. Бынан бер нисә йыл элек үҙен Мәүлет әүлиә тип атаған милләттәшебеҙ халҡыбыҙҙың тарихи миссияһы һәм киләсәге тураһындағы фекерҙәрен белдереп, ҡулдан-ҡулға йөрөүсе хат тараткайны. Был заттың үҙ халҡына мөрәжәғәтендә фәһемле фекерҙәр байтаҡ. Айырыуса киләсәгебеҙҙең асылын боронғо телебеҙҙән эҙләргә кәрәклеге тураһындағы фекере бик төплө һәм нигеҙле тойолдо миңә. Миненсә, төрлө төркөмдәргә ҡараған донъя халыҡтары телдәрен этнолингвистик сағыштырыу юлы менән глобаль тикшеренеүҙәр ойошторола ҡалһа, айырым телдәрҙең килеп сығышы менән бер рәттән, хәҙерге заманда бөтөнләйгә сит-ят булып бөткән милләттәрҙең уртаҡ архаик тамырҙарын да асыҡлап булыр ине.

Мин шәхсән кешелек берҙәмлеген, фән-ғилемде дини тәғлимәткә ҡаршы ҡуймайынса, белем серҙәрен аса алыу һәм боронғо тәү тел (йәки икеөс башланғыс тел) берлеген раҫлай алыу аша иҫбатлап була, тип фекер йөрөтәм. Тик был юҫыҡта фәлән-фәлән милләттең теле тарихта иң боронғоһо булған икән, кеүегерәк фараздарға ышанып барыу ярамаҫ. Милли тел менән этностың архаик теле араһындағы айырма ла ер менән күк айырымлығы кеүектер бөгөн. Әммә боронғолоҡ саҡырыуы, меңәр йылдар аша кире ҡайтыусы тарихи шаңдауҙай, бәғзе бер заттарҙың зиһен-кисерештәрендә тере камертондағы кеүек рухи яңғыраш табалыр. Тап ошондай рухи ауаздашлыҡтан мәхрүм булмағандарға ғына әлеге "тарихи һағыш", йәғни үҙеңдең айырым йәнеңдең һиңә тиклем йәшәп киткән меңәрләгән йәндәр аша боронғо халыҡтарға ҡан-ҡәрҙәшлеген, яҡынлығын һиҙеү-кисереү мөмкинлеге хас.

...Әлегерәк телевизорҙан аҙна һайын күрһәтелгән "Киносәйәхәттәр клубы" тигән тапшырыуҙы халыҡ ҡыҙыҡһынып ҡарай ине. Шул тапшырыуҙарҙың береһе башланып торғанда мин икенсе бүлмәлә инем, әммә телевизорҙан ишетелгән таныш булмаған көй минең иғтибарымды йәлеп итте: ул көй бер ни тиклем беҙҙең башҡорт моңдарына ауаздаш булғандай тойолдо миңә. Ғәжәпһенеп, был тапшырыуҙы ҡарарға булдым. Баҡһаң, Сенкевич Британия тарафтарында булған алыҫ Ирландия тураһында тапшырыу әҙерләгән икән. Ирландтарҙың бейеүҙәрен дә күрһәттеләр, бик хәрәкәтсән, темпераментлы бейей икән



ирланд халҡы. Уларҙың бейеү көйҙәрендә лә беҙҙең ҡайһы бер етеҙ ритмға ҡоролған бейеү мотивтарын шәйләргә була ине. Миңә шул саҡта ошо бер ни менән дә аңлатып булмаған моң аһәңдәшлеге бик ғәжәп булып тойолғайны. Әмәлгә ҡалғандай, ошо оҡшашлыҡты дәлилләп торған тағы бер ваҡиға булды ул ваҡытта. Үҙгәртеп ҡороу ("перестройка" тип аталды ул) сәйәсәте йылдарында Америка менән мөнәсәбәттәр йылына биргәс, беҙҙең филармониябыҙҙың бер төркөм артистарына тарихыбыҙҙа беренсе тапҡыр АҠШ-та сығыш яһау мөмкинлеге тыуҙы. Улар ошо мәҙәни сәйәхәттән ҡайтҡас, радионан махсус тапшырыу булды. Артистар үҙ тәҫьораттары тураһында һөйләне, әммә мине иң тулҡынландырғаны уларҙың ирланд сығышлы студент ҡыҙҙар менән осрашыуы тураһында бәйән итеүе булды. Был ваҡиғаны артистарыбыҙ үҙҙәре лә бер мөғжизәләй күреп һөйләгәйне.

Беҙҙең артистарға Америка университеттарында студенттар алдында ла сығыш яһарға тура килгән. Шулай, бер университеттағы концерттан һуң беҙҙең артистарыбыҙ янына әлеге ирланд ҡыҙҙары килеп, уларҙың сығышын бик яратып ҡабул итеүен белдерә лә, бергәләп тороп, боронғо йырыбыҙ "Гөлнәзирә"не көйләп тә ебәрә. Аптырап ҡалған яҡташтарыбыҙҙың һорауына улар үҙҙәренең фольклор мәҙәниәте менән бик ҡыҙыҡһынып, университет фонотекаһындағы донъя халыҡтары көйҙәре араһынан тап ошо башҡорт халыҡ йырын оҡшатып һайлап алыуы тураһында һөйләй. Ни өсөн башҡорт көйҙәрен үҙ итеүҙәре тураһында һорағас, "Һеҙҙең йыр-моңдарығыҙ беҙҙең боронғо ирланд көйҙәрен хәтерләтә, шуға ла күңелдәребеҙгә хуш килде улар", тип яуаплай. Күрҙегеҙме инде, океандар аша ғына түгел, быуаттар аша үтеп, ирланд ҡыҙҙары йөрәгендә тыуған "башҡорт һағышы"! Ошо моментты, даһи Гёте яҙғанса: "Туҡта әле, шул бер мәл, һин - гүзәлһең!" - тип нарыҡларға булыр ине.

Бер туҡтауһыҙ үҙгәреп торған фани донъяла бер нәмә лә бөтөнләйгә юҡҡа сыҡмайҙыр, икенсе дәүерҙәрҙә һәм яңы шарттарҙа яңыса ҡабатлана торғандыр, тигән фекер йәшәй. Боронғолоҡ ауазы, халыҡтарҙың тарихи хәтерендә булмаһа ла, генетик (аҫҡы аң) булмышында, тел тамырҙарында, йыр-моң даирәһендә һаҡлана килеп, беҙҙең күңелдәребеҙҙе ваҡыты-ваҡыты менән һиҫкәндереп ҡуялыр. Башҡорт менән инглиз телдәренең өн-фонетика өлкәһендәге уртаҡлығы нисек боронғо булһа, Ирҙәр иле ("Ирландия" атамаһы шул мәғәнәгә эйә) менән ата-бабаларыбыҙҙың архаик Башғарт-Башар-Баширҙәр донъяһы бәйләнешенең дә ысынбарлыҡҡа тап килеүен шулай уҡ боронғо бер күренеш тип атарға хаҡлыбыҙ. Улай булмаһа, беҙҙең халҡыбыҙ кеүек үк ирек һөйөүсе, яугир, ғорур һәм баш бирмәҫ булып танылған ирландтарҙа "башҡорт һағышы" тип атап булған феномен бер ҡасан да, бер кемдең дә күңелен биләмәҫ ине. Әйткәндәй, башҡорт һәм ирланд бейеүҙәрендәге тыпырлау элементтарының оҡшашлығын да ат йәнле халыҡтарыбыҙҙың зауыҡ уртаҡлығы рәүешендә ҡабул итергә кәрәктер.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



# БАШҠОРТТАР

## Боронғо мәғлүмәттәр

Әбеҙҙең ерҙәрҙә боронғо замандарҙа көнсығыш иран телдәрендә һөйләшкән сармат (юрматы), алан ҡәбиләләре йәшәгән, уларҙан бихисап ҡурғандар ҡалған һәм ошо боронғо ҡәбиләләр башҡортто формалаштырыуҙа ҡатнашҡан иң боронғо ҡәбиләләрҙән һанала. Йәғни Стәрлетамаҡ ҡалаһы оло юлдан эш буйынса төрлө яҡҡа саптырыусы кешеләрҙең мал алмаштырып, туҡтап ял итеп китеү урыны булған. Быға тағын бер дәлил - ошо уҡ ерҙәге Ашҡаҙар йылғаһының атамаһы. "Ашҡаҙар" атамаһы ла боронғо көнсығыш иран телдәрендә "туҡтап ял итеп, аттарҙы алмаштырып киткән урын" тигәнде аңлата. Тимәк, ул ерҙә борондан уҡ ниндәйҙер бер ҡала кеүек урын булған.

Башҡортостан тарихсылары (атап әйткәндә академик Н.А. Мәжитов), ҡайһы берәүҙәр бигүк күрергә, ишетергә теләмәһә лә, республикабыҙҙың баш ҡалаһы булған Өфө ҡалаһының да 1500 йыллыҡ тирәһе тарихы булыуын асыҡланылар. Боронғо Өфө ҡалаһы урамдарына 4-5 быуаттарҙа уҡ ағас тротуарҙар түшәлгән булған. Археологик ҡаҙыныуҙар барғанда ғалимдар был ҡалала алтын-көмөш менән эш итеүсе оҫтаханалар булғанлығын, уларҙа төрлө ювелир әйберҙәр эшләнелеүен асыҡланылар.

Яугир халыҡ булараҡ, башҡорттар бер ҡасан үҙҙәренә бикләнеп йәшәмәгән. Донъяла тыуып торған төрлө эреле-ваҡлы ваҡиғаларҙы ишетеп, уларҙың үҙҙәренең ихтыяждарына, мәнфәғәттәренә ҡағылғандарында әүҙем ҡатнашып, уларҙы үҙҙәренә кәрәк яҡҡа ауҙарырға, үҙгәртергә ынтылып йәшәгән халыҡ булған беҙҙең ата-бабалар. Фәндә тарих субъекты һәм тарих объекты тигән төшөнсәләр бар. Тарих субъекты икенселәр ҡулында уйынсыҡҡа әүерелмәйенсә донъяла тыуып торған төрлө тарихи ваҡиғаларҙы йә үҙе тыуҙыра, йәиһә икенселәр тарафынан сығарылғандарында ла әүҙем ҡатнаша. Башҡорт борондан тарихи ваҡиғаларҙа әүҙем ҡатнашҡан тарих субъекты булған. Быны беҙгә килеп еткән төрлө сығанаҡтарҙан күрәбеҙ.

Һуңғы шундай ваҡиғаларҙан XX быуат башында Рәсәй империяһы тарҡалып, илдә революцион ситуация килеп тыуғас, башҡорт үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алып, ҡоралл ғәскәр ҡороп, автономия өсөн тиңдәшһеҙ көрәшкә күтәрелә. Мәскәүҙе үҙе менән иҫәпләшергә мәжбүр итеп, уның менән Килешеү төҙөп, 2019 йылда 100 йыллығын байрам иткән Башҡортостан Республикаһын төҙөүгә өлгәшә. Был ваҡиғалар башҡорттоң әле көс-ғәйрәте һүрелмәүенең бер сағыу күренешелер.

Һәр халыҡ (ҙурмы ул, аҙ һанлымы) үҙ яҙмышын үҙе хәл итергә ынтыла. Беҙҙең халҡыбыҙҙың тарихтағы эҙҙәре быға сағыу бер миҫалдыр. Башҡорт тарихын өйрәнәсәк киләсәк быуын тарихсылары халҡыбыҙҙың ҡаһарман үткәненә яңы асыштары менән тағын да данлыҡлы ваҡиғаларҙы өҫтәп, үҙҙәренең өлөшөн индерерҙәр тигән өмөт бар. Сөнки көнсығыш сығанаҡтарында әле беҙгә билдәһеҙ, беҙ белмәгән бихисап факттар һаҡланыуына ышанам.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**
**(Аҙағы).**

# ГЕНЕРАЛ

***✓ Миңлеғәли Шайморатов башҡорт дивизияһы командиры, башҡорт генералы - халыҡ батыры булып танылды һәм уның ошо исеме тарих биттәрендә мәңгегә ҡаласаҡ.***

**2012 йылдың 12 авгусы. Донбастағы Петровское ҡалаһының мәҙәниәт һарайында ҡала етәкселеге һәм йәмәғәтселеге 112-се Башҡорт (16-сы Черниговской) гвардия атлы дивизияһының 70 йыллығына арналған "Өфө - Берлин - Өфө" автопробегында ҡатнашыусылар менән тантаналы осрашыу кисәһе ойошторҙо. Сәхнәлә башҡорт егете Илһам Бәҙретдинов "Шайморатов генерал" йырын яңғырата, Сәүиә Ғәзизова башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары кейемендә хисләнеп бейей, Миндеғәфүр Зәйнетдинов тиҫтәләгән ҡумыҙҙарында уйнап, халыҡтың хушын ала, зал алҡыштарға күмелә. Дон казактары ла һис ҡалышмай: улар ҙа үҙ сығыштарында башҡорт генералы Миңлеғәли Шайморатовты һәм уның яугир ҡаһармандарын данлай. Иҫтәлекле тамашаны йомғаҡлап, кисәне алып барыусы әйткән һүҙҙәр хәтеремә мәңгегә уйылып ҡалғандыр: "Ватаныбыҙҙың рухи күгендә ҡаһарман генерал Шайморатовтың яҡты йондоҙо мәңге балҡыһын!" Зал тулы халыҡ аяғүрә баҫты, ихлас алҡыштар оҙаҡ тынманы.**



## Милләте - башҡорт уның!

Әле лә иҫемдә, уҙған быуаттың 60-сы йылдары башында, ауыл мәктәбендә уҡытыусы апайыбыҙ өйрәткән "Шайморатов генерал" йыры беҙгә бик оҡшай ине, уны ауыл клубында хор менән йырлар инек. Күп тә үтмәне, ауыл китапханаһынан яҙыусы Әхтәм Ихсандың "Саҡма тояҡ аттарҙа" китабын алып уҡыным - ошо ваҡыттан башлап ошо легендар шәхес тураһында байтаҡ мәҡәләләр яҙылды, китаптар баҫылды, һәм ул әле лә үткән шанлы вә данлы заман кешеләренең генә түгел, ә бөйөк һуғыштан һуң тыуған барлыҡ милләттәштәребеҙҙең күңелен биҙәп, һоҡландырып, ылыҡтырып тора. Бындай яҙмыш, ул нисек кенә трагик булмаһын, бик һирәктәр өлөшөнә төшәләр.

Мәшһүр генералыбыҙҙың тормошо, хәрби эшмәкәрлеге хаҡында барса мәғлүмәт тә табылып, өйрәнелеп бөткәндер, тип уйлау дөрөҫ булмаҫ ине. Бының үҙ сәбәптәре бар. Бына уның милли сығышы, нәҫел-нәсәбе хаҡында ла төрлө хәбәрҙәр ишетергә була. Биштәкә ауылының 1-се мәсетендә теркәлгән метрик исемлектә уның атаһы Минһажетдиндың мишәрҙәрҙән сыҡҡан башҡорт, әсәһе Бибитайфаның типтәр башҡорто, тип яҙылыуы мәғлүм. Шайморатов нәҫеленең үтә ярлыларҙан һаналыуы ла билдәле: ата-бабаларының Биштәкә ауылына күсеп килеүе Исәт провинцияһында йәшәүсе әйле башҡорттарының 1774 йылда күтәргән ихтилалын баҫтырған ваҡытҡа тура килә. Шуға күрә уларҙың бында үҙ ерҙәре лә булмай. Ошо хаҡта Миңлеғәли Шайморатов дивизия политбүлеге начальнигы урынбаҫары Сабир Ҡадировҡа ла һөйләй, Мәскәү архивтарында ошоно раҫлаусы документ табыуын да иҫкә ала. Тимәк, уның милли тамырҙары әйле башҡорттарына барып тоташа. Ә Биштәкә ауылына 1755 йылда мең ырыуы башҡорттарынан һатып алынған ерҙә 8 мишәр ғаиләһе нигеҙ һала.

Әммә был ауылға артабан ерһеҙ ҡалған башҡорттар ҙа килеп урынлаша башлай. Иғтибар итһәң, ул замандарҙан Миңлеғәли Шайморатов тыуғансы 135 йыл уҙып, уның нәҫеле 4 быуын алыштырған була. Әлбиттә, ситтән килгән башҡорттар менән мишәр-типтәрҙәр араһында никахлашыу булыуы - тарихи факт. Әйткәндәй, 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарында Шайморатов (Биштәкә) ауылы кешеләренең 64 проценты башҡорт милләтенән булыуы теркәлгән.

Йәнә бына нимә: 1941 йылдың декабрендә полковник Шайморатовты - Мәскәү янында барған үлемесле һуғышта ҡаһарманлығы менән дан алған 1-се Махсус полк командирын - оборона наркоматының кадрҙар бүлегенә саҡырып алалар. Тейешле һорауҙар менән бер рәттән, уның милләтен дә һорайҙар. Шайморатов үҙенең башҡортлоғон раҫлай. Шунан һуң уны Башҡортостанда ойошторолоусы 112-се башҡорт атлы дивизияһына командир итеп тәғәйенләү тәҡдиме булыуы хаҡында ла әйтәләр. Шайморатов һис һүҙһеҙ риза була. Нисек кенә булмаһын, Миңлеғәли Шайморатов башҡорт дивизияһы командиры, башҡорт генералы - халыҡ батыры булып танылды һәм уның ошо исеме тарих биттәрендә мәңгегә ҡаласаҡ.

## Ул маһир разведчик та булған

Күптәребеҙ Шайморатовтың маһир разведчик булыуы хаҡында хәбәрҙар түгел. Ә уның исеме һәм ҡыҫҡаса биографияһы В.М. Лурье һәм В.Я. Кочик авторлығындағы "ГРУ: дела и люди" китабына индерелгән. Ул 1934 - 1935 йылдарҙа хәрби атташе вазифаһында Төркиәлә булһа, Ҡытайға ике тапҡыр (1935 - 1937, 1939 - 1940 йылдар) оҙайлы командировкаға ебәрелә, Синьцзян провинцияһында Генштабтың махсус заданиеһын үтәй, Ҡытай Ҡыҙыл Армияһын төҙөүҙә ҡатнаша, хеҙмәттәре өсөн Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. СССР етәкселеге, генсек И.В. Сталин уға ҙур ышаныс белдерә: 1941 йылдың октябрендә, дошман Мәскәү янына уҡ килеп еткән дәһшәтле ваҡытта, М.М. Шайморатов Кремлде һаҡлаусы 1-се Махсус полк командиры итеп ҡуйыла.

## Ордены ҡайтты ҡайтыуға...

1942 йылдың июленән октябрь айына тиклем Брянск фронтында, Олым йылғаһы буйында барған ҡан ҡойғос һуғыштарҙа 112-се Башҡорт атлы дивизияһы иҫ киткес ҡаһарманлыҡ күрһәтә, уның 97 яугиры һәм офицеры орден һәм миҙалдар менән билдәләнә. Тик, ни эшләптер, комдив был юлы наградаһыҙ ҡалдырыла. Уңайһыҙ хәлдән сығыу өсөн командование полковник Шайморатовтың Ленин орденына лайыҡлы булыуы хаҡында награда ҡағыҙын тултырып, оборона наркоматына ебәрә. Әммә комдивҡа был награда бирелмәй. Награда ҡағыҙының алғы битенең һул яҡ мөйөшөнә зәңгәр ҡара менән "Кр.Звезда" тип яҙылған, имза ҡуйылған, уның аҫтында датаһы ла күрһәтелгән - 8.8.42. Тимәк, был 1942 йылдың 8 авгусы була. Әммә ул саҡта оборона наркоматы ниндәй ҙә булһа ҡарар ҡабул итмәй әле. Генерал-майор дәрәжәһендә булған комдив Шайморатовты ошо орден менән наградлау тураһындағы документ 1943 йылдың 14 февралендә, уның һәләк булыуына ни бары 9 көн ҡалғас ҡына раҫлана. М.М. Шайморатовтың ана шул "Ҡыҙыл Йондоҙ" орденын, архив документтарының күсермәһе менән бергә, 2016 йылда ғына Башҡортостанға алып ҡайттылар. Шулай ҙа мәшһүр комдивтың ҡаһарманлыҡ йондоҙоноң әлеге орден йондоҙонан күпкә сағыуыраҡ булыуы барыбыҙға ла күптән билдәле бит инде.

## Үлем менән яуланған үлемһеҙлек

1943 йылдың 23 февралендә, дошман тылына яһалған рейдтың һуңғы көнөндә, Шайморатовты өнәп бөтмәгән, уны үҙенең конкуренты итеп күргән иҫерек комкор Борисовтың күрәләтә хаталы, хәрби яҡтан бер нисек тә нигеҙләнмәгән бойороғо арҡаһында

*✓ "Батыр үҙе үлһә лә, данлы исеме ҡала", тиҙәр халыҡта. Туған Башҡортостаныбыҙҙа ла, алыҫ Донбасс ерендә лә генерал Шайморатовтың исеме берҙәй ҡәҙерләп иҫкә алына.*



юғары хәрби әҙерлекле, ҙур тәжрибәле башҡорт генералы үҙ яугирҙарын, разведка яһау мөмкинлеге бирелмәгәс, фашистар билгән позицияларға табан йүнәлтергә мәжбүр була. Ни өсөн ул үҙе алдан төшкән һуң? Бында уның дошман тылындағы рейдта йоҡоһоҙ-ниһеҙ йөрөп, ал-ялһыҙ барған алыштарҙа ныҡ арығанлығын да, комкор М.Д. Борисовтың башҡалар алдында уға екеренеүен, уҫал янауын да, уның тупаҫ бойороғон үтәргә мәжбүр ителеүен дә иҫәпкә алыу кәрәктер. Миненсә, Миңлеғәли Шайморатов алдан эшләнмәгән разведканы үҙе башҡарған, дошман утын иң беренсе үҙенә алған. Һуғыш һуғыш инде, унда үлемдән бер кем дә ҡурсаланмаған, әммә башҡорт генералы үҙ тәне менән арттараҡ килгән яугирҙарын ҡаплап, батырҙарса һәләк булған.

Генералыбыҙҙың ҡаһармандарса һәләк булыуы хаҡында быға тиклем дә күп яҙылды, бик күп шаһиттарҙың аңлатмалары, хәтирәләре баҫылып сыҡ-ҡанында) дошман засадаһына юлыға. Беренсе Юлино хуторында иһә комкор Борисов, бер ниндәй разведкаһыҙ, яугирҙарҙың арыуҙан аяҡтарында көсһәлгә тороуҙарына ҡарамаҫтан, кисекмәҫтән Мало-Николаевка һәм Ивановка йүнәлешендә алға барыуҙы талап итә. Комдив Шайморатов, яугирҙарын подполковник Г.Е. Фондеранцев һәм полковник И.И. Голенев етәкселегендә ике колоннаға бүлеп, ҡуҙғалырға бойороҡ бирә, үҙе бер төркөм штаб офицерҙары һәм һаҡсы взводы яугирҙары менән алға, Штеровка ауылына табан йүнәлә. Бынан фронт һыҙығы үткән Мало-Николаевка ауылына ни барыһы 5-6 саҡрым ғына ҡалған була.

Әйтергә кәрәк, ошо ваҡытта Романов һыҙаһының тәрән ҡар менән ҡапланған асыҡ яланында генерал-майор С.И. Дудко ла, комкор М.Д. Борисов та булмай, улар, арттараҡ ҡалып, икенсерәк йүнәлештә бара. Был саҡта Петровское заводы ҡасабаһы ла, Ште-тирәлә туҡтауһыҙ атыш барған, пулялар һыҙғырып осоп торған, шуға командирҙы башҡа ерҙә ерләй алмағандар икән. Үәт, исмаһам, әкиәт! Теге карателдәр был саҡта ни эшләне икән һуң, генералды язалағас, уның адъютант офицерын да шундай уҡ яҙмыш көтөргә тейеш ине лә баһа. Имеш, һуғыштан һуң ошо өйҙөң хужабикәһе лә, тере ҡалған адъютант та ошоларҙы раҫлап, аңлатма биргән. Хужабикәнең дә, адъютанттың да исемдәре аталмай! Сәбәбе бер - былар тик уйҙырма ғына.

Дүртенсенән, Маслов һәм уның версияһын яҡлаусылар Башҡортостандан Штеровка ауылына килгән махсус комиссияны бер ниндәй дәлилһеҙ яуаплылыҡта, хатта аңлы рәүештә фальсификацияға барыуҙа ғәйепләй, икенсе бер генерал С.И. Дудконы М.М. Шайморатов итеп күрһәттеләр, тип саң ҡаға. Ә комкор Борисовтың урынбаҫары булған С.И. Дудконың икенсе бер билдәһеҙ полковник менән бергә Икенсе Юлино хуторы янында ерлә-

# ЙОНДОҘО

ты, 1948 йылда БАССР Хөкүмәте тарафынан генерал һәләк булған ергә (Ворошиловоград өлкәһенең Иваново районы Штеровка ауылына) ебәрелгән махсус комиссияның һығымталары лә билдәле булды. Тап шул саҡта генералдың үлеме менән бәйле күп һорауҙарға яуап табыла, әлегерәк уның яҙмышы менән бәйле билдәһеҙлек юҡҡа сығарыла. Эксгумация һәм медицина экспертизаһы уҙғарғандан һуң М.М. Шайморатовтың кәүҙәһе Петровское ҡасабаһындағы хәрби часть территорияһында, уның хөрмәтенә тейешле хәрби йолалар башҡарылып, ҡайтанан ерләнә.

## Тарихи дөрөҫләкмә, әллә уйҙырмамы?

Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бәғзе бер замандаштарыбыҙ, арзан сенсация артынан ҡыуып, комдив Шайморатовтың фашистар тарафынан әсир ителеп, немецтарға хеҙмәт иткән карателдәр ҡулына тапшырылыуы, вәхшиҙәрсә язалап үлтерелеүе хаҡында уйҙырмаға ҡоролған мәғлүмәт тарата башланы. 2012 йылдың 18 мартында "РБ 21 век" сайтында В. Мырҙағәрәевтың "Генерал Шайморатовтың һәләк булыуы. Билдәле булмаған сығанаҡтар" тигән мәҡәләһе донъя күрҙе, уны бәғзе бер йәшерәк ғалимдарыбыҙ хуплап сыҡты. В. Мырҙағәрәев Украинаның Глухов педуниверситеты музейы хеҙмәткәре, тарихсы А.А. Масловтың АҠШ-та һәм Украинала баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәренә таяна. Әйтергә кәрәк, А.А. Маслов яҙмаларында генерал М.М. Шайморатовтың фажиғәле үлеменә бәйле материалдар ысынбарлыҡты уйҙырма-инсинуациялар менән бутап бирәү форматында бирелгән. Ошондай һығымта яһар өсөн тейешле ерлек бармы һуң? Әлбиттә, бар.

Беренсенән, А.А. Маслов Шайморатов Беренсе Юлино хуторы янындағы бәрелештә ауыр яраланып, немецтар һәм улар яғында һуғышҡан Дон казактары тарафынан әсирлеккә алынды, тип раҫлай. Ысынбарлыҡта Шайморатов Беренсе Юлино хуторы янында түгел, ә Штеровка ауылынан саҡрым ярым ерҙә, Романов һыҙаһында (бал-ровка ауылы ла немецтар ҡулында була. Романов һыҙаһының Штеровкаға ҡараған төньяҡ яғы ваҡ агаслыҡ, ҡыуаҡтар менән ҡапланған, 40-60 метр бейеклегендәге таш ҡаялы һырттан ғибәрәт. Шәхсән үҙем ике тапҡыр ошо ҡаялы ҡалҡыу урынға килеп, уның ситендә торғаным булды, немецтарҙың засадаһы тап ошонда булған. Бынан беҙҙең яугирҙарыбыҙ ҡар ярып барған асыҡ ялан ус аяһындағылай күренеп тора. Ошондай хәлдә засадаға эләккәндәрҙең иҫән-һау ҡотола алыуына хәрби эште аҙ ғына белһә лә белгән кеше һис ышанмаясаҡ.

А.А. Маслов ауыр яраланған комдивты һатлыҡ Дон казактары ҡулына эләккән, тип яҙа. Был туҙға яҙмаған хәл: 5-6 саҡрым ерҙә фронт һыҙығы үтә, дошман тылында 7-се кавалерия корпусы өҙләкһеҙ һуғыш алып бара, бында фашистарҙың карателдәр менән бергә һуғыш хәрәкәттәре алып барыуына һис ышанырлыҡ түгел. Ошо тиңһеҙ алыштарҙа ҡатнашып, иҫән ҡалған яугирҙарҙың, командирҙарҙың береһе лә ниндәйҙер билдәһеҙ карателдәрҙе осратыуы, улар менән һуғышып йөрөүе хаҡында бер ни ҙә һөйләмәй бит!

Икенсенән, Маслов әфәнде яҙғанса, фашистар яралы генералды шунда уҡ карателдәр ҡулына тапшыра. Был бөтөнләй менән немец офицерҙарының фронт ҡағиҙәләренә, инструкцияларына тап килмәй. Әсир алынған генералдар, яралы булған хәлдә лә, атып үлтерелмәй, улар һаҡ аҫтында немецтарҙың ҡыр госпиталдәренә алып кителә. Шул уҡ яралы комкор Борисовты немецтар бер ҙә карателдәр ҡулына тапшырмай бит. Ҡыҙыл Армияның әсирлеккә эләккән генералдарының исем-шәрифтәре кисекмәҫтән Берлинға ебәрелә, улар махсус баҫмала иғлан ителә, пропаганда алып барыу маҡсатында файҙаланыла.

Өсөнсөнән, Масловтың уйҙырмаларында карателдәрҙең Шайморатовты Штеровка ауылының бер өйөнә индереп һалып, уны язалап үлтереүе, шунан һуң уның адъютантының һәм әсир алынған кавалеристарҙың комдивты ат һарайында ерләүе хаҡында тәфсирләп тороп бәйән ителә. Йәнәһе, яҡын-неп, артабан ошо урын һөрөнтө ергә әйләндерелеп, әлеге ҡәберҙең юғалыуы хаҡында ла мәғлүмәт булыуы ни өсөндөр сенсация авторҙарының иғтибарынан ситтә ҡала.

## Беҙ ҡапсыҡта ятмай ул

Комдив Шайморатовҡа арналған "Генерал" исемле документаль фильм авторы Радик Ҡоҙаяров та Маслов версияһын хуплай, тик унынса, үлтерелгән комдивтың кәүҙәһе ҡойоға ташлана һәм ул әле лә "Дон далаһындағы" ҡойо төбөндә ята икән. Р. Ҡоҙаяров АҠШ-та һәм Германияла табылған ниндәйҙер яңы материалдарға, вермахт архивы документтарына һылтана, әммә уларҙың күсермәләре күрһәтелмәй.Ошо режиссер тырышлығы менән, йәнәһе, дәүләт сере итеп иҫәпләнгән тиҫтәләрсә архив материалдары асыҡ, тип иғлан ителә. Баҡтиһәң, хатта Украина гражданы Масловҡа ла Рәсәй оборона министрлығы архивындағы әле бер кем дә күрмәгән-уҡымаған документтар билдәле булған икән дә баһа! Әммә улар ҙа Ҡоҙаяров фильмында күрһәтелмәй. Маслов-Ҡоҙаяров һәм Ко компанияһы, һис бер тартыныуһыҙ, Рәсәй властары М.М. Шайморатовтың Дон казактары тарафынан үлтерелеүен әлегә тиклем халыҡтан йәшерергә тырыша, тип һығымта яһап та ҡуя. Тик улар халҡыбыҙҙың бер фәһемле мәҡәлен белмәй: "Беҙ ҡапсыҡта ятмай". Әгәр ошо "объектив тикшеренеүселәр" күтәреп сыҡҡан "тарихи дөрөҫлөк" хаҡ булһа, ул Донбаста ла күптән билдәле булыр ине. Бындай әҙәмдәр кем тирмәненә һыу ҡойғандарын үҙҙәре лә аңлап бөтмәй, ахыры.

## Шайморатовсылар эҙе юйылмаҫ

Яҙмам аҙағында бәғзе ғалимдарыбыҙҙың А.А. Масловты күккә күтәреп маҡтағанына, хатта башҡорт халҡы исеменән уға рәхмәт хаттары ебәреү хаҡында һүҙ сурытҡандарына яуап итеп, ошо украин ғалимының күрәләтә алдашыуын фашлаған бер факты күрһәтеп китәм.

А.А. Маслов, иғтибар итегеҙ, "60-сы йылдар башында" ике профессор һәм ике полковник составында БАССР Хөкүмәте комиссияһының М.М. Шайморатовтың ҡәберен эҙләп табыр өсөн Украинаның Штеровка ауылына килеүе тураһында яҙа. Йәнәһе, тап улар Романов балкаһындағы ҡаяға "Здесь похоронен генерал М.М. Шайморатов", тип яҙып ҡалдырған икән. Масловтың фальсификацияһына ярашлы, әлеге комиссия бер нисә йылдан һуң ғына Штеровкаға яңынан килеп, билдәһеҙ генералдың ҡәберен асып, уның һөйәктәрен рейдтан сыҡҡан саҡта һәләк булған кавалеристарҙың Петровское ҡалаһындағы туғандар ҡәберлегендә ерләп ҡайта. Былар барыһы ла бары ҡоро уйҙырмаға ҡоролған, ә ысынбарлыҡта булған хәл-ваҡиғалар тиҫтәләрсә тарихи документтарҙа, шул иҫәптән яҡташыбыҙ, 112-се Башҡорт кавдивизияһының политбүлек начальнигы урынбаҫары С.Р. Ҡадировтың "Урал бөркөтө" исемле китабында ла асыҡ сағылдырылған. Ысынында, С.Р. Ҡадиров етәкләгән комиссия суд-медицина эксперты, профессор В.Г. Кузнецов, ТАСС-тың Башҡорт дивизияһындағы фотохәбәрсеһе Л.И. Яҡупов, дивизия политбүлеге хеҙмәткәре, журналист К.Х. Ғәбитов составында Штеровкала 1948 йылдың көҙөндә була. Ә Романов балкаһындағы ҡаяға яҙылған "Здесь 23. II. 43 г героически погиб генерал Шайморатов" тигән һүҙҙәр 1948 йылдың йәйендә Рәми Ғарипов һәм уның класташы Рифғәт Алғушаев тарафынан ташҡа соҡоп яҙылған. Ошо хаҡта шағир үҙенең көндәлектәрендә бына нисек яҙып ҡалдыра: "Здесь" һәм "23. II. 1943 г" тигәнде - мин , "героически"ҙе Рифғәт яҙҙы. Мин тағы "погиб генерал"ды өҫтәнем. Ләкин күп тә үтмәне, беҙҙең тешәүестәр үтмәҫләнде. Беҙ бер генә тешәүес менән алмашлап яҙырға тотондоҡ. Мин сүкегәндә Рифғәт ҡая башына ултырып, ошо шиғырҙы яҙҙы:

*Юйылмаҫ эҙ*
*Ташҡа уйып, ҡая күкрәгенә*
*Шайморатов исеме яҙылған.*
*Йылдар үтер*
*Бәлки, ошо ҡая*
*Емерелер яҙғы һыуҙарҙан.*
*Уның данын мәңге юя алмаҫ*
*Көслә ямғыр, ыжғыр елдәр ҙә..."*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эйе, ошо ваҡиғаларҙан һуң күп йылдар үтте, заманалар үҙгәрҙе. "Батыр үҙе үлһә лә, данлы исеме ҡала", тиҙәр халыҡта. Туған Башҡортостаныбыҙҙа ла, алыҫ Донбасс ерендә лә генерал Шайморатовтың исеме берҙәй ҡәҙерләп иҫкә алына. Яҙҙар еткән һайын Петровское ҡалаһының урындағы халыҡ генерал Шаймортов майҙаны тип атап йөрөткән иҫтәлекле урынындағы туғандар ҡәберлеге аллы-гөллө сәскәләргә күмелә.**

**2016 йылдың 23 апреле. Луганск Халыҡ Республикаһының Петровское ҡалаһында, халыҡ менән шығырым тулы мәҙәниәт һарайында, ҡаланың 22-се урта мәктәбенә генерал-майор М.М. Шайморатов исеме биреләүгә арналған тантаналы кисә бара. Башҡортостан йәмәғәтселеге исеменән алып килгән бүләгемде мәктәп директоры Гөлназ Сероваға тапшырғас, ҡотлау һүҙҙәремә ҡушып, ошолай тигәйнем: "Башҡортостан, башҡорт халҡы менән Дон казактары араһындағы дуҫлыҡ, теләктәшлек Ватаныбыҙ азатлығы өсөн йәндәрен аямаған меңәрләгән батырҙарыбыҙҙың изге ҡандары менән нығытылған. Ҡаһарман генерал Миңлеғәли Шайморатовтың йондоҙо, күңел күктәребеҙҙә яҡтырып, мәңге балҡып торасаҡ!"**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

**✓ Шул янғын ваҡиғаһынан һуң атаһы менән ихлас һөйләшеп ҡайтыуҙары Миңлеғәлиҙең хәтерендә ғүмерлеккә уйылып тороп ҡала, был хаҡта ул Бөйөк Ватан һуғышы уттарына барып ингәс тә, иптәштәренә һөйләп-һөйләп алыр ине.**



**Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандарының данлы исемлегендә 112-се (16-сы гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһының сәйәси бүлеге етәксеһе урынбаҫары, отставкалағы гвардия подполковнигы Сабир Рәхим улы Ҡадиров та лайыҡлы урын алып тора. Ул тәүге көндәрҙән үк башҡорт дивизияһын төҙөүселәрҙең береһе булып, уның составында 1944 йылдың мартында 7-се гвардия кавалерия корпусының 52-се полкы командиры урынбаҫары вазифаһына күсерелгәнгә тиклем барлыҡ яуҙарҙа ҡатнаша. Еңеү көнөн Эльба йылғаһы ярҙарында ҡаршылай. I һәм II дәрәжәләге Ватан һуғышы, 3 Ҡыҙыл Байраҡ ордены, тиҫтәләгән миҙалдар менән наградлана.**
**С.Р. Ҡадиров 1906 йылда Бәләбәй районының Туҙлыҡыуыш ауылында тыуып үҫкән. Ул 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры, генерал-майор М.М. Шайморатовтың тормош юлын һәм хәрби эшмәкәрлеген сағылдырған "Урал бөркөтө" исемле китап авторы. Ошо ҡиммәтле мәғлүмәт сығанағы күптәребеҙгә билдәле түгел, һеҙҙең иғтибарығыҙға шул китаптың айырыуса ҡыҙыҡлы һәм фәһемле урындарын тәҡдим итәбеҙ.**

# УРАЛ БӨРКӨТӨ



## Утта янмай, һыуҙа батмай

Аҙ ерле, фәҡирлек менән көн күреүсе Минғазетдин ағай менән Нәжибә еңгәләрҙең 1899 йылдың 15 августында тыуған Миңлеғәлиҙән башҡа йәнә ике улы, ике ҡыҙы була. Хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районында Шкил тигән кескәй йылға буйына ултырған йәмле Биштәкә ауылының тирәяғында игенселек өсөн уңайлы булған ундырышлы тигеҙлектәр икһеҙ йәйрәп ята һа ла, ауыл халҡының 62 проценты ерһеҙ, аслы-туҡлы көн күрә. 1907 йылға тиклем бында мәктәп булмаған, халыҡтың күбеһе уҡый-яҙа белмәгән. Беренсе Рус революцияһы еле менән, ниһайәт, ауылда дүрт класлы беренсе баҫҡыс земство мәктәбе асылғас, батрак улы Миңлеғәли ҙә шунда уҡырға керә, русса уҡырға-яҙырға өйрәнә.

"Бәләкәйҙән үк мыҡты кәүҙәле булып үҫте,- тип хәтерләй уның тураһында Ғәлимә апаһы. - Урта буйлы, киң күкрәкле, янып торған ҡара күҙле ағайым сос, йылғырлығы менән тиҫтерҙәренән айырылып торор ине. Ул күп һөйләмәҫ, әйткән һүҙенә тоғро, башлаған эшен аҙағынаса еткерер, бөтә төрлө яңылыҡтар менән ҡыҙыҡһыныусан, ихлас күңелле булып хәтеремдә һаҡланған".

Икенсе бер ваҡиғаны ла ауылда ҡыҙыҡ итеп иҫкә алалар: йылға буйында балыҡ мәскәүләп йөрөгәндә, Ташбулат тигән малай, аяғы тайып китеп, һыуға ҡолай. Яңындағы иптәштәре, ҡоттары осоп, төрлөһө-төрлө яҡҡа сәсрәп ҡасып бөтә, бер Миңлеғәли генә тороп ҡала. Ул шунда уҡ күҙ йомоп һыуға сума һәм быуа һыуын байтаҡ һемереп өлгөргән эшлекһеҙҙе сәсенән һөйрәп тә сығара. Ул саҡтарҙағы ғөрөфғәҙәт буйынса иртәгеһен урам буйлап өйҙән-өйгә яңы бәйет тарала.

*Шкил төптәре ҡаты ла,*
*Ташбулат таштай батты.*
*Миңлеғәли шәп тапты ла*
*Ҡалҡыуыс кеүек ҡалкты,*
*- Утта янмай, һыуҙа батмай*
*Минғаздың кинйә заты.*

Ә бер ваҡыт Булгаков утарындағы йылҡы аҙбарында янғын сығып китә. Сарылдап кешнәгән атты ҡотҡарыу өсөн, дөрләп янған ут эсенә ташланғас, мал йәнле Миңлеғәлиҙе, ысынлап та, "утта янмай, һыуҙа батмай" тип кенә йөрөтә башлайҙар...

Ана шул янғын ваҡиғаһынан һуң атаһы менән ихлас һөйләшеп ҡайтыуҙары Миңлеғәлиҙең хәтерендә ғүмерлеккә уйылып тороп ҡала, был хаҡта ул тиҫтәләгән йылдар үтеп, Бөйөк Ватан һуғышы уттарына барып ингәс тә, иптәштәренә һөйләп-һөйләп алыр ине.

Ул көндә эштән кисләтеп, ай яҡтыһында ҡайталар. Декабрҙең ап-аҡ мамыҡ ҡары ҡаплаған осһоҙ-ҡырыйһыҙ ялан, донъя йөҙө һил, "әф!" иткән дә ел әҫәре юҡ. Тәбиғәт үҙе уйланырға, күңелдең нескә ҡылдарын инрәтергә саҡырғандай. Минғазетдин ағай моңло көйгә әкрен генә йыр һуҙа:

*Күгәреп тә яткан*
*күк Уралҡай -*
*Атай-олатайҙар төйәге.*
*Утта ғына янмай,*
*һыуҙа батмай*
*Ир-егеттең аҫыл һөйәге.*

- Их улым, улым! - тип көрһөнә Минғазетдин ағай. - Рәсәй тигән ошо бәхетһеҙ мәмләкәттә ҡанаттары бәйле бөркөттәй интегеп, ғүмер буйы ҡайғы-хәсрәттән һыктаған ярлы халыҡты ут эсенән кем тартып алыр икән?.. Халыҡты батша-байҙар иҙеүенән ҡотҡарыу сараһын эҙләп табырға ине!

- Тирмәндә бер Белорет эшсеһен осраттым, - ти Миңлеғәли, тулҡынланып, - ниндәйҙер йомош менән килгән. Ул әйтә, ҡотолоу сараһы бар, ти. Хеҙмәтсән халыҡ үҙенә бәхетте ошо һөйәлле ҡулдары менән генә яулап аласаҡ, ти.

- Бишенсе йылда ла шулай тигәйнеләр ҙә, улым... Ләкин донъя һаман да элекке көйөнсә ҡалды. Беҙҙең атай-олатайҙарҙы айбарландырған Салауат яуҙарынан, унан алдағы башҡа бик күп яуҙарҙан һуң да үҙгәрешһеҙ ҡалған кеүек...

Аҙыраҡ уйланып барғандан һуң, Миңлеғәли һорай ҡуйҙы:

- Атай, әйт әле... шуны күптәнән белгем килеп йөрөй. Беҙҙең Шайморатовтар нәҫелен, батшаға ҡаршы бунт күтәреп, ҡайҙандыр ҡасып килеп төпләнгән йорт, тиҙәр, ысынмы шул?

Минғазетдин ағай тәрән итеп көрһөндө:

- Беҙҙең башҡортта батшаға ҡаршы баш күтәрмәгән нәҫелырыу бармы икән, улым?.. Эйе, атай-олатайҙарҙың һөйләүенсә, беҙҙең нәҫел, ысынлап та, алыҫ Урал аръяғынан күсеп килгән... Исәт провинцияһынан. Урал заводтарындағы ҙур боланы 1764 йылда Бибиков кенәз ҡан ҡойоп баҫтырғандан һуң... Урал аръяғы Әйле ырыуы башҡорттары булабыҙ беҙ.

Был әңгәмә үҫмер егеттең атаһы менән һуңғы ихлас һөйләшеүе булғандыр: 1913 йылда Минғазетдин ағай ҙа был яҡты донъяны ҡуя, яратҡан кинйә улына ул, әйтерһең дә, ата-бабаларҙан һуҙылған быуындар сылбырының осҡо алтын ҡулсаһын тотторып китә. Ошо юлдарҙың авторына генерал был хаҡта һуңынан, ауыр фронт шарттарында ла, иҫкә алып, былай тиер ине:

- Граждандар һуғышы тамамланғас, Мәскәүҙә академияла уҡығанда, архивтан атайым һүҙҙәрен дөрөҫләүсе документты табып алдым. Боронғо атай-олатайҙар Иҫке Исәт провинцияһының ҡайһы тирәһендәрәк йәшәгәнен белгем килгәйне минең...

## Ат уйнатып алдан бара

Майор Нафиҡовтың үлеүенә Шайморатов бик ныҡ ҡайғырҙы - ул батыр командир, уның тоғро дуҫы, таянысы ине. Ауыр көрһөнөп: "Ҡыйыу йөрәкле, Коммунистар партияһына, Бөйөк Ватанға йәнтәне менән бирелгән, үҙ эшен яҡшы белгән, тактик яҡтан оҫта командир ине", - тине. Ошо ҡайғылы хәбәрҙе ишетеү менән, бөтә подразделениеларҙа матәм митингылары уҙғарылды, һөйөклө тыуған ергә, Башҡортостан халҡына башҡорт һуғышсыларының изге анты рәүешендә хат яҙып ҡабул ителде, унда түбәндәге юлдар бар ине:

"Башҡорт атлылары дошманды аяуһыҙ ҡыра!

Башҡортостан халҡына - үҙенең героик улдарынан.

Ҡәҙерле иптәштәр! Әсәселәр, әсәсе ҡатын-ҡыҙҙар, колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, хеҙмәтсән интеллигенция, беҙҙең ғаиләләребеҙ һәм туғандарыбыҙ!

Беҙ, Башҡортостандан килгән боецтар, командирҙар һәм политработниктар, көрәкле хәрби әҙерлек үтеп, хәҙер дошманға ҡаршы актив һуғыш хәрәкәттәре алып бара башланыҡ һәм һеҙгә боевой сәләмебеҙҙе ебәрәбеҙ.

Беҙ, Совет Башҡортостаны улдары, һәр ҡарыш еребеҙҙе яуыз дошмандан батырҙарса һаҡлайбыҙ. Башҡортостан атлылары дошманға ҡаршы ҡаты һуғыштарҙа уны артҡа алып ташланылар һәм уға ҙур юғалтыу килтерҙеләр. Күп йәнле көстәрен ҡоралдары һәм материаль частары менән бергә ҡырҙылар. Байтаҡ орудиеларын, минометтарын, пулеметтарын, һуғыш припастарын юҡ иттеләр һәм трофейҙар баҫып алдылар.

Башҡорт халҡының воиндары, бөйөк Советтар Союзының бөтә воиндары - рус, украин, белорус, ҡаҙаҡ, грузин һәм башҡа халыҡтарҙың воиндары кеүек үк, үҙҙәренең намыҫы һәм азатлығы өсөн, Тыуған илде Гитлер эттәренән азат итеү өсөн көрәшеүҙәрен белә. Боецтарыбыҙ, командирҙарыбыҙ һәм политработниктарыбыҙ арыҫлан кеүек һуғышалар, ысын геройлыҡ күрһәтәләр.

Беҙ үҙебеҙҙең һуғыш хәрәкәттәренең айырым эпизодтары һәм батыр атлы воиндарыбыҙҙың героизмы тураһында һеҙҙең менән уртаҡлашыуыбыҙға шатбыҙ.

Оборона һыҙығының бер участкаһына дошман эсэсовсылар менән көсәйтелгән, автоматик ҡорал менән ҡоралланған мотомеханизацияланған пехотаһын килтерҙе һәм танктар, самолеттар ышыҡы аҫтында оборона районына йырып үтеү һәм частарыбыҙҙы ҡамап алыу өсөн беҙгә удар бирергә әҙерләнде. Иҫерек фашист бандиттары минометтан һәм пулеметтан өҙлөкһөҙ алып барылған ут аҫтына ышыҡланып, Н. йылғаһы аша сыға алдылар. Ләкин беҙҙең атлылар ҡаушап ҡалманы. Улар фрицтарҙы мөмкин тиклем яҡыныраҡ үткәреп ебәрҙеләр һәм "ура", "Тыуған ил өсөн" тигән орандар менән

контратакаға ташландылар, немецтарҙы элекке позицияларына ҡыҫырыҡланылар. Дошмандың психик атакаһы кире ҡағылды, ул ҙур юғалтыу кисерҙе.

Нафиҡов иптәштең боецтары һәм командирҙары был һуғышта айырыуса батырлыҡ һәм ныҡлылыҡ күрһәттеләр, улар гитлерсыларҙы ауыҙ ҡырҙылар, һуғышта етәкселек иткән Нафиҡов геройҙар үлеме менән үлде.

Н. участкаһында барған һуғыштарҙа Кусимов иптәш часының боецтары һәм командирҙары дошмандың күпкә өҫтөн көстәренә ҡаршы өс тапҡыр контратакаға күсте, дошманды артҡа алып ташланы, уны ҡасырға мәжбүр итте. Иптәш Кусимов, етди яраланыуына ҡарамаҫтан, алыш аҙағына тиклем үҙ посында ҡалды. Беҙ гүзәл командирыбыҙ менән ғорурланабыҙ.

Бер ваҡыт беҙҙең часть командованиенан яуаплы задание - фрицтарҙы халыҡ йәшәй торған бер пункттан ҡыуып сығарырға бойороҡ алды. Разведка унда дошмандың автоматик минометтар, артиллерия менән ҡоралланған һәм танкылар колоннаһына ышыҡланған ҙур көстәре барлығын билдәләне. Бурыс бик етди ине. Командованиенең заданиеһен алғас та, беҙҙең атлылар төндә, һис көтмәгәндә, һөжүм иттеләр. Аңшайған дошман, һушын йыйып, бөтә төр ҡоралдарҙан ҡоторонған рәүештә ут асты. Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең боецтар дошмандың арыш эсендә ятҡан боевой расчеттарын юҡ итте, халыҡ йәшәй торған пунктҡа бәреп инде һәм унан фашист баҫҡынсыларын ҡыҫырыҡлап сығарҙы. Бурыс үтәлде.

Башҡорт халҡының данлыҡлы улдарының исемдәрен килтерәбеҙ.

Взвод командиры лейтенант Сафи Юртынбаев фашист баҫҡынсыларына ҡаршы батыр һуғышты, командир яраланғандан һуң подразделение менән командалыҡ итеүҙе үҙ өҫтөнә алды һәм үҙенең ҡаһарманлығы, гәйрәтлелеге менән рухландырып, боецтарҙы атакаға алып барҙы. Бында дошманға ҙур юғалтыуҙар килтерҙе.

Танкыға ҡаршы орудие наводчигы Ф. Ниғмәтйәнов 500-600 метр алыҫлыҡтан тоҫҡап атып, 120-гә яҡын фашист һалдатын һәм офицерын, ике пулемет ояһын юҡ итте.

Өлкән сержант Ибраһим Ғәпсәләмов үҙ подразделениеһының беренсе сафтарында батыр һуғышты, үҙ ҡулы менән дошман офицерын үлтерҙе һәм документтарын алды. Дошмандың көслө уты аҫтында ауыр яраланған лейтенант Насировты һуғыш майҙанынан алып сығып, медпунктҡа илтте.

Хәрби фельдшер Н. Яҡупов дошмандың көслө уты аҫтында алғы һыҙыҡтан яраланған 41 кешене алып сыҡты һәм уларға беренсе ярҙам күрһәтте.

Ветфельдшер Фәйзелғаян Нурмөхәмәтов дошман офицерын, ике һалдатын үлтерҙе һәм уларҙың ҡоралын алды. Пулеметчик Ғәзизйән Ҡотдосов фашист автоматчиктарының ике ут нөктәһен юҡ итте һәм пулеметынан көслө ут асып, дошмандың психик һөжүмгә барыусы колоннаһын таратып ебәрҙе.

Миномет батареяһы командиры Фәтхи Ғайсин, минометтан мәргән атып, дошмандың ғәскәрҙәр тейәлгән понтон кәмәһен юҡ итте.

Сержант Дауыт Хафизов 6 немец һалдатын үлтерҙе, дошмандың станоклы пулеметын юҡ итте һәм яраланған хәлендә һуғыш аҙағына тиклем үҙ подразделениеһының башында торҙо. Өлкән сержант Хәләф Юлдашев ҡара-ҡаршы алышта 4 немец һалдатын үлтерҙе.

Өлкән лейтенант Тереғолов, политрук Низамов, өлкән лейтенант Ғиниәтуллин, политрук Мостафин, лейтенант Гәрәев, старшина Нарбеков, ҡыҙыл армеецтар Абдуллин, Мәҡсүтов, Ғарипов, Ғәлимов, Яҡупов, Ғатауллин, Ҡиямов, Дәүләтгәрәев, Вахитов, Мөхәмәтдинов һәм башҡа күптәр һуғышта үҙҙәрен батыр тоттолар.

Командование күп боецтарҙы һәм командирҙарҙы хөкүмәт наградаһына билдәләне.

Беҙҙең арала бер генә артҡа сигенеүсе лә, бер генә паникер ҙа һәм Тыуған иленә хыянат итеүсе булманы, тип беҙ ғорурлыҡ менән әйтә алабыҙ.

Гитлерсы фашистар Советтар Союзы халыҡтарын, шул иҫәптән башҡорт халҡын, немецлаштырырға һәм уларҙы фашист кеше ашаусылар ҡулына бирергә теләйҙәр. Ләкин был барып сыҡмаҫ. Башҡорт атлылары Советтар Союзын фашист баҫҡынсыларынан азат итеү өсөн һуңғы тамсы ҡанын бирергә, кәрәк була икән, бөтә ғүмерен бирергә әҙер. Боевой иптәштәребеҙҙең үлеме өсөн беҙ дошмандан аяуһыҙ үс аласаҡбыҙ. Ҡайҙа осратһаҡ, шунда дошманды ҡырасаҡбыҙ.

Беҙ, ҡәҙерле иптәштәр, Тыуған ил өсөн барған һуғышта һәләк булған боецтарҙың һәм командирҙарҙың ғаиләләрен айырыуса иғтибар һәм хәстәрлек менән солғап алыуығыҙҙы һорап һеҙгә мөрәжәғәт итәбеҙ. Бер үк ваҡытта һеҙғә, һәр ҡайһығыҙ үҙенең хеҙмәт посында Тыуған илебеҙҙең тылын тағы ла ныҡыраҡ ныҡытығыҙ, фронтҡа көн һайын күберәк ярҙам күрһәтегеҙ, арымай-талмай фронт өсөн ҡорал, һуғыш припастары, продукттар әҙерләгеҙ, тип мөрәжәғәт итәбеҙ. Заводта ҡорамалдарҙы, тимер юл һәм һыу юлы транспортын тәүлек әйләнәһенә файҙаланығыҙ, уңышты урыпйыйыуҙы һәм башҡа ауыл хужалығы эштәрен боевой рәүештә үткәрегеҙ.

Беҙҙең боевой эштәребеҙҙе үткер күҙ менән күҙәтеп барыуығыҙҙы беҙ беләбеҙ һәм башҡорт халҡының беҙгә тапшырылған байрағын ныҡ тотасаҡбыҙ, тип һеҙҙе ышандырабыҙ. Беҙҙең территориябыҙға бәреп ингән фашист баҫҡынсыларын аяуһыҙ ҡырасаҡбыҙ.

Совет халҡының беҙҙең союздаштарыбыҙ булған башҡа бөйөк державалар халыҡтары менән дуҫлыҡта, бөтә донъяла фашизмды еңеү байрағын ҡаҙаясаҡ ваҡыт алыҫ түгел.

Часть командиры Шайморатов.
Часть комиссары Нәзиров.
Батальон комиссары Абдуллин".

**(Дауамы бар).**

ӘҘИП МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

# ЙӨРӘККӘ УЙЫЛҒАН...

## "Һин - журналист" тигән тамға

**Танылған шағирә, Ш. Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты,"Башҡортостан" гәзите редакцияһының тынғыһыҙ журналисы Лариса АБДУЛЛИНАға журналистарҙың Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһына тәҡдим ителеүе уңайынан бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**➔ Ш. Хоҙайбирҙин премияһына дәғүә итеүсе лайыҡлы журналистарҙың береһенең. Һөнәр кешене яһай, тигәндән сығып, журналистика һине үҙгәрттеме, тәрбиәләнеме, булмышыңа үҙ мөһөрөн баҫтымы, тип һорағы килә?**

- Журналистика - ул әҙәбиәт тә, филология ла түгел, ул бөтөнләй үҙе бер башҡа тормоштоң бик күп тармаҡтарынан торған замана һулышы. Башҡорт дәүләт университетының тап журналистика бүлеген тамамлау инеүмә айырым бер яуаплылыҡ һалғандыр, тип уйлайым артҡа әйләнеп ҡарап. Ә унда журналистиканың ижади серҙәрен аңлатҡан Рашат Ғәлиев, мәҙәни һәм әхлаҡи талаптарын төшөндөргән Давид Гутман, методологияһы һәм теорияһы дәрестәренән уҡытҡан Валерий Пугачев, жанр үҙенсәлектәренән генә түгел, ә тормош дәрестәре лә биргән кураторыбыҙ, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Миҙхәт Ғәйнуллин, диплом етәксем Тимерғәле Килмөхәмәтов тора. Шул тиклем рәхмәтлемен ошо уҡытыусыларыма! Ә инде юлдың иң башында торған әсәйемдең тынғыһыҙ йәмғәт эшендә ҡатнашыуы, мәҡәләләр, шиғырҙар яҙыуы, "Пионер" журналының бүлек мөдире, остазым Венер Йәнбәковтың бала саҡтан ҡанаттар ҡуйып ебәреүе - ошо берсә ҡыҙыҡлы, берсә айҡап сыҡҡыһыҙ диңгеҙ кеүек киң майҙанлы журналистиканы шундай итеп яраттырҙы, хәҙер инде үҙемдә сәфәрҙәрһеҙ, әңгәмәләрһеҙ күҙ алдына ла килтерә алмайым.

Бик иркә үҫтем, "алтыным", "торнаҡай" тип кенә уяҡан әсәйемдән миңә был донъяны йөрәкһеп яратыу тойғоһо күскән. Ә журналистика уны, кешеләрҙе тағы ла ныҡыраҡ яратырҙы. Башҡортостанды, башҡорттар йәшәгән ҡайһы төбәкте генә барып күрһәм дә, тәү тапҡыр күргәндәй, ғашиҡ булам, шиғырҙар яҙа башлайым. Туған ерем кешеләренең йәшәү ғәмен, сәмен һүрәтләр өсөн ҡай саҡ теләмдә һүҙҙәрем етмәй китә кеүек хатта. Кешенең уны менән һулы һымаҡ, журналистика менән шиғриәт бөтә булмышымда тулышып йәшәй. Үҫмер аңыма Али Карнайҙың журналист яҙмалары, очерктары, талымһыҙ ҡеүәте, студент сағымда Рәми ағайҙың көндәлектәре, яҙмалары, журналистикаһы бик ныҡ тәьҫир иткәйне. Журналистикала улар кеүек булғым килде. Шуға күрә журналистика мине улар миҫалында тәрбиәләне, мөһөр һалманы, ә тамға һалды, тип әйтә алам. "Һин - журналист" тигән тамға. Хәҙер мин беләм, диплом алып ҡына журналист булып булмай, журналистика - ул йыр, һүҙ сәнғәте кеүек, илһамлы ижад.

**➔ Башҡорт журналистикаһының киләсәген ниндәйерәк сифаттарҙа тәрбиәләү зарур? Бөгөн йәш журналистарҙы тәрбиәләргә тейешле быуын үҙ бурысын атҡарамы? Һәм был киләсәкте һин нисек итеп күҙаллайһың?**

- Бөгөн бөтә донъя журналистикаһында үҙгәреш бара. Ул башҡорт журналистикаһына ла ҡағылмай булмай. Хәҙер мәғлүмәт таратыу, улар менән бүлешеү сығанаҡтары - медиа майҙаны бик киңәйҙе. Башҡорт халҡының үҙенең боронан килгән тәрбиә алымдары, әҙәп ҡағиҙәләре бар, ана шуға ярашлы был бөгөн республика баҫмалары ла. Бына шунан тайпылмаһаҡ, сәпкә тура килер. Уҡыусыға төрлө ғәйбәт, бысраҡ, "ҡара" мәғлүмәт алыу өсөн башҡа сығанаҡтар ҙа етәрлек. Беҙ ниндәй телдә яҙабыҙ, шул халыҡҡа хеҙмәт итәбеҙ. "Урал батыр" эпосы яҙылған телдә яманлыҡ таратмаҫ коллегалар. Беҙ бит бөгөн хатта һәр уҡыусыбыҙҙы беләбеҙ, тиергә була. Милләтте һаҡлау өсөн бөгөнгө замана технологияларын файҙаланып, мәғлүмәттең ҡара яуынан ҡурсалау зарур.

Йәштәр менән эш ҡатмарлыраҡ баралыр, сөнки журналистикаға килергә теләгәндәр хәҙер күп тип әйтә алмайым, шул уҡ ваҡытта бөгөн һәр кем үҙ-үҙенә журналист. Тоталар ҙа мәғлүмәтте интернетҡа һалалар, шунда уҡ видеоматериал да ҡуйыла. Хатта бөгөн "Яндексдзен" аша һәр кем журналистиканың мәғлүмәт таратыу функцияһын файҙаланып, аҡса эшләй ала. Быны өсөн хатта һине рәсми баҫмала эшләү ҙә кәрәкмәй. Өфөлә үткән "Инфорум"да үҙем практикала ҡулланған алымдарҙың теоретик яңғырашын ишеттем, киң файҙаланылыуына шаһит булдым. Йәштәргә нисек мәҡәлә, мәғлүмәт яҙыу буйынса дәрес үткәргәнем бар, киләсәктә ошо алымды киңерәк майҙанға сығарырға кәрәк. "Башҡортостан" гәзитенең электрон версияһына көнөнә донъяның төрлө мөйөшөнән ун-ун өсәр мең кеше инә. Тимәк, ошо телдә сыҡҡан мәғлүмәткә ихтыяж бар. Эшләйек! Төрки телдәренең иң боронғоһо булған башҡорт теленең медиамайҙандағы хәл-торошо ла беҙгә бәйле. Йәштәрҙең әүҙемлеге, гаджеттар менән иркен файҙаланып, башҡортса шрифтҡа күсеп, мәғлүмәттәрен башҡортса яҙыуҙары - хәҙер тәбиғи күренеш. Шул уҡ ваҡытта улар "Бәйләнештә", "Инстаграм" кеүек социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәләрен дә башҡортса әйләндереп алған. Башҡорт теле, бер ҡараһаң, бер боронғо аҡһаҡал, икенсегә баҡһаң, интернетта теле асылған сабый. Журналистың ҡоралы - бына ошо тел. Йәштәрҙе тупларға ғына кәрәк, уларҙың ҡулында ҡоралы ла бар, ниәте лә бар.

**➔ Редакцияла эшләүсе һәр кешенең журналист түгеллеген беләбеҙ. Шул уҡ ваҡытта күп яҙыу йәки экранда өҙлөкһөҙ балҡыу менән генә лә уҡыусы, тамашасы һөйөүен яулап булмай икәнлеге лә сер түгел. Ошоларҙан сығып, нисек уҡымлы журналист булырға?**

- Әллә инде. Редакцияла эшләгәндәр ҙә, бер өҙлөкһөҙ экранда күренгән яңылыҡтар хәбәрсеһе лә - һәр кем барыбер бөгөн нимә лә булһа яҙа, хәбәр еткерә икән, шул осорҙоң картинаһын тыуҙырыуға үҙ өлөшөн индерә инде ул. Рәми ағайҙы телгә алмаған бер көн юҡ, тиген кеүек, йәнә лә уның яҙғаны иҫкә төшә: "Һәр эштең була үҙ шиғриәте". Журналистика минең өсөн шиғриәт кеүек үк - йөрәк һүҙем, һыҙланыуҙарым, шатлыҡтарым, көйөнөстәрем. Яҙа белеү менән бергә, ихласлыҡ, теманы белеп, аңлап ижад итеү ҙә мөһим. Ҡалыплашҡан стилдә файҙаланғандар ҙа бар. Практикаға килгәндәргә, йәштәргә һәр саҡ: "Ошо ваҡиға хаҡында яҡын кешеңә нисек һөйләйһең, шулай яҙ!" - тип өйрәтәм. Халыҡсан, кешегә аңлайышлы тел кәрәк.

"Һөйөүен яулау" тигәнендән сығып шуны әйтә алам, яҙған кеше һөйөү яулайым, ти яҙмай, шулай бит? Ул фекер еткерә! Уйлы, фекерле журналист ҡына уҡыусыһын таба торғандыр. Бер ҡараһаң, журналист - ул замана сирҙәренә дөрөҫ диагноз ҡуйған, шул уҡ ваҡытта йәмғиәттәге сирҙәрҙә дауаларҙан табип та. Иҫ киткес һөнәр. Валерий Вениаминович әйтмешләй, "ғүмеремдә мең тапҡыр ошо һөнәрҙе һайлауыма ҡыуандым". Уҡымлы журналист булғың килә икән, бул һуң! Ниәтең дөрөҫ, тырышлығың булһа, миңә ҡалһа, тауҙар аҡтарырға була!

**(Дауамы 16-сы биттә).**

ИНТЕРНЕТТАН



# НЕСКӘ БИЛДӘР АҠЫЛЛЫРАҠ

■ Һимереүҙең төрлө типтары була - кемдәрҙер биленә, кемдәрҙер аяғына, янбашына май күберәк йыйыла. Лондон колледжы белгестәре билдәләүенсә, билдәге артыҡ май баш мейеһе торошо менән бәйле икән. Бил йыуанырак булған һайын, мейенең ҡайһы бер өлөштәре кәмей. Тап ошо өлөштәр күп функцияларға, мәҫәлән, эске ағзалар эшмәкәрлегенә яуаплы. Һимеҙлек менән яфаланыусылар еҫтәрҙе лә насар айыра. Ә кеше ризыҡты башлыса еҫенә ҡарап һайлай.

■ Тәмле итеп сәй эсеп алғандан һуң күңел күтәрелеп китә. Сәйҙән бигерәк, уға ҡушып ашалған тәм-том нервыларҙы тынысландыра. Әммә нервы көсөргәнеше ваҡытында организм шәкәрҙе тотоноп бөтә һала ла, яңынан яңы порциялар талап итеп тик тора. Шуға ла тәүҙә күңелегеҙҙе өйкәп торған проблеманы хәл итегеҙ. Унан һуң сәй эсеп алғанда ла була. Ә бына иммунитет түбәнәйгәндә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һеҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта.

■ Миннесота университеты ғалимдары асыҡлауынса, ата-әсәһе артыҡ ныҡ ҡурсалаған һәм контролдә тотҡан балаларҙың уҡыуы насар була. Бынан тыш, бындай балаларға дуҫтар табыуы ла ауыр. Эксперттар фекеренсә, өлкәнәйгән саҡта бала үҙенең тойғолары һәм ҡылыҡтары менән идара итергә өйрәнергә тейеш. Өлкәндәр ягынан булған контроль уларға ошоно үтергә ҡамасаулай. Тикшеренеүселәр 8 йыл дауамында 422 бала менән шөғөлләнә. Белгестәр ата-әсәләр менән баланың үҙ-ара мөнәсәбәтен дә күҙәткән. Нимә эшләргә кәрәклеген гел әйтеп торған әсәйҙәрҙең балалары үҙенең тойғоларына баш була белмәгән, үҙҙәрен насар тотҡан. 2 йәшлек балаға гел нотоҡ уҡып тораһығыҙ икән, 5 йәшкә еткәс уның насар ҡылыҡтарына аптырарға кәрәкмәй. 5 йәштә бала үҙе ҡылған эштәрҙең насармы, яҡшымы икәнен аңларға тейеш. Был йәштә ошоғо өлгәшкән бала 10 йәшкә еткәндә үҙенең хистәрен тыйып тота белә, тимәк, тормоштоң социаль өлкәһендә уңышлыраҡ була, мәктәптә яҡшыраҡ уҡый. Баланы артыҡ ҡурсаларға түгел, ә уға тойғоларын контролдә тоторға өйрәтергә кәрәк ғаиләлә.

■ Төш, ғәҙәттә, ҡаралы-аҡлы була. Шул уҡ ваҡытта, сағыу төштәр күреүселәр ҙә бар арабыҙҙа. Был уларҙың интеллект кимәле бик юғары икәнен белдерә. Америка ғалимдары фекеренсә, төҫлө төштәр күрергә һәм уларҙы иҫтә ҡалдырырға интеллектары юғары булған кешеләр генә һәләтле. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә ике меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Уларҙың ҡайһы берҙәре йоҡлаған саҡта төш күрһәләр ҙә, уянғас уны онотоуҙары тураһында белдергән. Тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙың бер өлөшө бөтөнләй төш күрмәүҙәрен әйткән. Тик аҙҙар ғына даими рәүештә төш күргән һәм уларҙы деталләп һөйләй алған. Был һынауҙар үткәс, тикшеренеүселәр уларҙың интеллектуаль һәләттәрен тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән дә инде.

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ

**Ете квадрат метрлыҡ офистар, чиновниктар өсөн ҙур булмаған фатирҙар, парламент эшмәкәрлеген тормошҡа ашырыу өсөн һалым түләүселәрҙең аҡсаһын ҡулланыуҙа сикләүҙәр… Швед депутаттары башҡа илдәрҙең депутаттары кеүек үк өҫтәмә льготалар (чартер самолеттарына бюджет, фатирҙы ҡуртымға алыуҙа ярҙам, шәхси консультанттар яллау, медицина сығымдарын түләүҙәге ярҙам һ.б.) менән файҙаланмай. Бынан тыш, Швецияла "парламент иммунитеты" төшөнсәһе бөтөнләй юҡ! Улар гәҙәти граждандар кеүек көн күрә һәм быға ихтыяж да юҡ, сөнки улар үҙҙәренең төп бурысы тип һайлаусыларҙың мәнфәғәтен яҡлауҙы һәм улар йәшәгән ысынбарлыҡты белеүҙе ҡуя. Граждандарҙың мәнфәғәте буйынса сығыш яһай алыу - улар өсөн иң ҙур өҫтөнлөк, сөнки улар шулай итеп ил үҫешәсәк йүнәлешкә йоғонто яһау мөмкинлегенә эйә була.**

# ДЕПУТАТ ЯРҘАМСЫҺЫ ЛА,

## бушлай кофе ла юҡ унда



Швецияның 349 депутатына ла, парламент президентына ла йәмәғәт транспортын файҙаланыу өсөн йыллыҡ карта бирелә. Рәсми автомобилдәр бик аҙ һәм улар менән ҡулланыу сикләнгән. Парламенттың үҙ автомобиле бар. Улар парламент президенты һәм үҙ вице-президент өсөн рәсми сараларҙа ҡатнашҡанда файҙаланыла. Хеҙмәт машиналары өйгә ҡайтыу йәки эшкә йөрөү өсөн дә, такси ҙа түгел, тиҙәр бында.

Швецияла автомобиль менән ҡулланыу хоҡуғына бер генә сәйәсмән - премьер-министр ғына эйә. Автомобиль илдең Дәүләт Именлек хеҙмәте ҡарамағында. Министрҙар етди сәбәп булғанда ғына транспорт сараһын һорай ала.

Парламент депутатының тулайым эш хаҡы айына 66900 крон (7200 доллар самаһы). Барлыҡ һалымдарҙы түләгәндән һуң, саф эш хаҡы күләме 40000 швед кроны самаһы ҡала (4300 доллар тирәһе). Был сумма илдәге башланғыс синыфтар уҡытыусыһының эш хаҡынан ике тапҡырға кәмерәк. Әгәр депутаттың Стокгольмдан ситтә һайлау базаһы бар икән, ул "тарктамент" - илдең баш ҡалаһында эшләгән көндәре өсөн ярҙам һорай ала. Был ярҙам баш ҡалала даими йәшәү урыны булмаған депутаттарға бирелә һәм 110 крон (12 доллар) тәшкил итә.

1957 йылға тиклем Швеция парламентының хатта эш хаҡы ла булмай, улар партия ағзаларының иғәнәләрен генә ала. Парламентарийҙарға эш хаҡы тәғәйенләү, илдең бер генә гражданы ла "иҡтисади сәбәптәр арҡаһында депутат булыуҙан мәхрүм булмаһын" өсөн билдәләнә. Әммә уның күләме "иҡтисади яҡтан ылыҡтырырлыҡ юғары" булырға тейеш түгел. Бер генә депутат та үҙенә эш хаҡын арттыра алмай, ул бойондороҡһоҙ комитет тарафынан башҡарыла. Комитет үҙ кешенән тора: отставкалағы судья булған президенттан, элек вазифа биләгән кешенән һәм элекке журналистан. Уларға парламент советы бер ниндәй ҙә күрһәтмә бирә алмай. Комитет йәйге каникулдарҙан һуң йыл һайын йыйыла, әммә был депутаттарға йыл һайын эш хаҡы арттыралар тигәнде аңлатмай. Бының өсөн комитет йәмғиәттәге дөйөм иҡтисади шарттарҙы, инфляция кү-ләмен, дәүләт һәм шәхси секторҙағы эш хаҡы тирбәлешен анализлай. Һөҙөмтәнән сығып, эш хаҡы 1 йәки 1,5 процентҡа арттырыла, йәиһә бөтөнләй үҙгәртелмәй. Һәм бының өсөн парламентта тауыш биреү ҙә кәрәкмәй.

Баш ҡалала фатиры булмаған һәм һайлау участкаһы ситтә булған сәйәсмәндәр генә чиновниктар өсөн фатирҙарҙа йәшәргә хоҡуҡлы. Уларҙың майҙаны 45,6 квадрат метрҙы тәшкил итә, йәғни унда 16 квадрат метрлы бер генә бүлмә бар. Швеция парламенты ҡарамағында булған 197 йорттоң һигеҙенең генә майҙаны 70-90 квадрат метр. Был биналарҙа кер, һауыт-һаба йыуыу машиналары, хатта ике кешелек карауат та юҡ. Диван-карауат ҡуйылған бүлмә бер үк ваҡытта зал да, йоҡо бүлмәһе лә булып тора. Туғандары йәки ғаилә ағзалары килгәндә, депутаттар тәғәмәсле өҫтәмә карауат ҡуя ала. Әммә улар дәүләт милке булған фатирҙа йәшәү түгел, хатта бер төн бушлай ҡунып та сыға алмай - депутат бер ай эсендә ҡаҙнаға аҡса индерергә тейеш. Бынан тыш, парламентарийҙар йортто үҙҙәре таҙарта, бушлай таҙартыу йәйге парламент каникулдары ваҡытында ғына башҡарыла.

Парламенттың һәр бинаһы залында көндәлек гәзит-журналдар ята. Улар коллектив ҡулланыу өсөн яҙҙырыла: матбуғатҡа яҙылыу партия тарафынан финанслана, депутаттарҙың подписка өсөн шәхси бюджеты юҡ. Улар гәзит-журналдарҙы офистарына алып уҡый ҙа, кире урынына килтереп һала. Шулай уҡ парламент китапханаһында ла көндәлек матбуғат бар.

Парламентта депутаттарҙы хеҙмәтләндереүсе официанттар юҡ. Һәр кем үҙе артынан йыйыштыра, тәрилкә-ҡалаҡтарҙы үҙе йыуа. Әгәр ул ҡиммәтле ресторанда ашарға теләй икән - шулай уҡ үҙ кесәһенән түләй.

Швед системаһында һәр сәйәси партия ярҙамсылар һәм кәңәшселәр яллау өсөн сикле сараға эйә, был төркөмдә партия секретариаты булдыра һәм улар партияның барлыҡ депутаттарын хеҙмәтләндерә. Йәғни, парламентарийҙарҙың кәңәшселәр һәм ярҙамсылар төркөмө сәйәси анализ яһай һәм матбуғат менән бәйләнеш булдыра. Һәр депутат үҙенең эш графигын алып бара, үҙенең сығыштарын әҙерләй, осрашыуҙарын ойоштора, поезға һәм самолетҡа билеттарға заказ бирә. Һайланған ваҡытта швед парламентында 35 биттән торған "Сәйәхәт ҡағиҙәләре"н ала. Бына депутаттар өсөн бер нисә ҡағиҙә: барыһы ергә иң осһоҙло транспорт һайланырға; сәйәхәт өсөн автомобилдәр парламенттың туристик агентлығынан, килешеү төҙөлгән компаниялардан ҡуртымға алынырға тейеш. Сығымдар һәм тирәяҡты һаҡлау арҡаһында махсус йәки ҡиммәтле автомобилдәрҙе арендаға алырға ярамай. Әгәр урынбаҫар шәхси транспортында йөрөй икән, оҙон маршрут һайларға сәбәп булмағанда, иң ҡыҫҡа юлды һайларға тейеш. Депутаттар йәмәғәт транспортына альтернатива булмағанда йәки етди сәбәп булғанда ғына такси менән файҙалана ала. Сит илгә сығыуға килгәндә, швед депутатына 50 000 крона (яҡынса 5400 доллар) тотонорға рөхсәт ителә.

Швед парламентарийҙары бер йәки ике мөҙҙәт эшләгәндән һуң да ғүмеренең һуңынаса түләнгән пенсияға өмөт итә алмай. Швед законында яҙылғанса, пособие (пенсия) парламенттағы эше тукталғандан һуң күсеү осоронда финанс ярҙамы маҡсатында бирелә. Ул элекке депутатҡа даими ярҙам түгел. Парламентта һигеҙ йыл эшләгәндән һуң ике йыл дауамында депутатҡа эш хаҡының 85 проценты күләмендә пособие түләнергә мөмкин. Ә уны бер йыл алыр өсөн ул үҙенә яңы эш урыны эҙләүен раҫларға тейеш. Әгәр инде ҡыл да ҡыбырлатмаһа, пособие түләү туҡтатыла. Әгәр парламентарий икенсе мандат алһа йәки сәйәси ҡарашын үҙгәртһә, шулай уҡ пособие түләү туҡтатыла.

Швеция парламентының 94 процент депутаты эш хаҡы алмай, сөнки уларҙың сәйәси вәкиллеге төп эшмәкәрлеге менән параллель рәүештә алып барыла.

✓ *Мөхәммәт бәйғәмбәр шулай тип иҫкәртә: "Кем күрәҙәсегә барып, ни тураһындалыр һорай һәм ул әйткәндәргә ышана, уның мотлаҡ доғалары ҡырҡ көн буйына ҡабул ителмәй".*



*ЙӘНӘШ ДОНЪЯ*

# КҮҢЕЛ БУШЛЫҒЫН...

## сихырсылар биләй

**Беҙҙең әйләнә-тирәбеҙҙә көн дә ғәжәп хәлдәр булып тора. Ни өсөндөр кешеләр һәм уларҙың йәне камиллашыу юлынан ситкә тайпыла, әхлаҡлылыҡ берәүҙе лә ҡыҙыҡһындырмай, беҙҙең менән аралаша торған фәрештәләр ҙә күктән ергә төшөргә ашҡынып тормай. Быны яуабы ябай: кешелек көндән-көн үҙенең эске яҡтылығын баҫа, барлыҡҡа килгән бушлыҡты тышҡы донъялағы "шатлыҡтар" менән яһалма тултырырға маташа. Ҡайһы ваҡыт күңел бушлығы һәм һалҡынлығы, әйләнә-тирәләге тотороҡһоҙлоҡ төрлө психик сирҙәргә алып килә.**



Социаль көйһөҙлөктәр, тотороҡһоҙлоҡ, эске ҡурҡыу һәм көйәләнеүҙәр, шулай уҡ психик өҙлөгөүҙәр етди проблемалар тыуҙыра. Ошондай хәлдә кеше төрлө хөрәфәттәргә бирелә, күрәҙәселәр, сихырсылар ярҙамына мөрәжәғәт итә.

Сихыр тигән нәмә, ысынлап та, бар. Уның тәьҫир итеү көсө булыуы ла ғәжәп түгел. Берҙән, һәр кем дә логик һәм физик ҡанундар менән эш итә белмәй. Икенсенән, сихыр, башҡа тыйылған нәмәләр, наркотик, фәхишәлек, алкоголь кеүек үк, кеше күҙенән йәшерелмәгән, уның иманын һынау критерийы булып тора.

Сихыр менән алама кешеләр шөғөлләнә. Уға ҡаршы торорға мөмкин. Имам Әль - Әйни әйтеүенсә, сихырланыу кешегә ебәрелгән сирҙәрҙең береһе. Ул, башҡа сирҙәр кеүек үк, дауалана. Сихыр менән шөғөлләнгән кеше шайтан ялсыһына, Аллаһыҙға әйләнә. Аллаһы Тәғәлә боронғо халыҡтарҙың береһенә һынау өсөн Харут менән Марут тигән фәрештәләрҙе ебәрә. Улар теләгәндәрҙең барыһын да сихырға өйрәтә, ләкин һуңында шулай тип иҫкәртә: "Беҙ һеҙҙе был гонаһлы шөғөлгә өйрәтә алабыҙ, әммә һеҙҙең унан баш тартыу мөмкинлегегеҙ бар, һеҙҙе был гонаһҡа берәү ҙә мәжбүр итмәй. Был яуызлыҡҡа өйрәнеп һәм уны ғәмәлдә ҡулланып, Хоҙайға ышаныстан баш тартыусы булмағыҙ".

Ләкин шуныһы: Хоҙайға ышанаһың һәм Уның менән бәйләнешең көслө икән, һин Уның көсө һәм ҡеүәте менән сихырсынан һаҡлана алаһың. Имам Әль - Хаттаби әйткән: "Сихырсылар - улар тапҡыр һүҙле, көслө ихтыярлы һәм ут һынлы була. Улар шайтан менән бәйләнештә тора".

Бер саҡ Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән сихырсылар тураһында һорағас, Ул: "Уларға бер ниндәй иғтибар ҙа бүлмәгеҙ", - ти. "О, Хоҙай илсеһе, ҡайһы саҡта ул сихырсылар әйткәндәр дөрөҫкә сыға бит", - тигәндәр тағы. Бәйғәмдәр шулай аңлатҡан: "Дөрөҫкә сыҡҡан мәғлүмәтте сихырсыға ен-шайтан еткерә. Бер үк ваҡытта сихырсы ул дөрөҫлөккә үҙенең меңләп алдағын ҡуша".

Һуңғы Бәйғәмбәр килгәнгә тиклем ен-шайтандар, ысынлап та, киләсәк тураһындағы мәғлүмәтте күктән "урлаша" алған. "Улар бер-береһенең өҫтөнә баҫып, баҫҡыс яһап, йыһанға бик бейеккә күтәрелгән. Алланың фәрештәләргә биргән фарманын тыңлап, ул мәғлүмәтте сылбырлап бер-береһенә тапшырған. Сылбырҙың һуңында торғаны мәғлүмәтте бер аҙ боҙоп, аштырып, сихырсыларға тапшыра торған булған".

Сатанизм өсөн был бик мөһим йүнәлеш була. Шайтан-Иблес үҙенең ҡолдары - ен-шайтандары аша бик күптәрҙе юлдан яҙҙыра, уларҙың иғтибарын Хоҙайҙан, Уның яҙғандарынан сихырсыларға һәм күрәҙәселәргә йүнәлтә. Күктән Ҡөрьән-Кәрим төшөрөлөү менән йыһан ен-шайтандарҙың "шымсылығынан" һаҡлана башлай. Сөнки Хоҙай илсеһе Ҡөрьән тексын һәм Бәйғәмбәр күрәҙәләүҙәрен бер ниндәй күсермәһеҙ, сихырсылар ҡыҫылыуынан тыш ҡабул итергә тейеш була. Уға ҡамасауларға маташҡан ен-шайтандар юлы метеорит һәм йондоҙҙар ярҙамында ҡыйыла. "Беҙ, - ти Хоҙай Тәғәлә, - күкте йондоҙҙар менән биҙәнек һәм улар буйһонмаҫ ен-шайтандарҙан күкте һаҡлау сараһы булып торҙо. Улар юғары йәмғиәттәге /фәрештәләр йәмғиәтендәге/ һөйләшеүҙәргә иғтибар менән ҡолаҡ һалыусан. Әммә ул ен-шайтандарҙың юлын быуып була. Уларҙың кемелер мәғлүмәтте тотоп та өлгөрәлер, әммә ул күктән мәғлүмәтте аҫҡа ебәреү менән артынан метеорит һәм йондоҙ атыла".

Шул замандан бирле ендәр беҙҙең планетаның күк йөҙөндә иркен йөрөй алмай. Бер хәҙистә шулай тиелә: "Ысынында, фәрештәләр болоттар кимәленә төшә һәм өҫтән ишетелгәнде бер-береһенә тапшыра. Ен-шайтандар ҡайһы саҡта уларҙың һөйләшеүен ишетә һәм мәғлүмәтте сихырсыларға тапшыра. Улары үҙҙәренән бик күп алдаҡ өҫтәй".

Тағы шуны аңлау мөһим: сихырсылар һәм юраусылар - улар бик нескә психологтар. Улар ен-шайтандар аша үҙенә килгән кеше тураһында кәрәкле мәғлүмәт ала. Кешенең үткәне тураһындағы мәғлүмәт ярҙамында ул был кешенең аңына, шулай уҡ ышанысына инә һәм уны теге йәки был киләсәккә көйләй. Был көйләү тормошҡа ашырға ла, ашмаҫҡа ла мөмкин.

Әйткәндәй, сихырсыға йә күрәҙәсегә барыу үҙе оло гонаһ һынала. Был хаҡта Мөхәммәт бәйғәмбәр шулай тип иҫкәртә: "Кем күрәҙәсегә барып, ни тураһындалыр һорай һәм ул әйткәндәргә ышана, уның мотлаҡ доғалары ҡырҡ көн буйына ҡабул ителмәй". Йәғни киләһе ҡырҡ көндәге мотлаҡ доғаларының сауабы ошо гонаһын ҡаплау өсөн китә.

**Шамил АЛЯУТДИНОВ.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**ҺОРАУ: Нострадамустың күрәҙәлектәрен нисек аңларға һуң? Ул бит Беренсе донъя һуғышын да, Азиялағы кризистарҙы ла, Косоволағы һуғыштарҙы ла алдан әйткән...**

**ЯУАП:** Күрәҙәселәр бер ваҡытта ла аныҡ һәм теүәл күрәҙәлектәр әйтмәй. Әлбиттә, Ер һәм кешелек тарихы тураһындағы белемдәренә таянып, шулай уҡ беҙҙең планетабыҙға тышҡы тәьҫирҙәрҙе өйрәнеп, ғалимдар билдәле бер эҙмә-эҙлелекте иҫәпләп сығарырға һәм шул нигеҙҙә теге йәки был глобаль үҙгәреште алдан әйтергә мөмкин. Киләсәктә ни булырын кешеләр Хоҙай Тәғәлә булдырған закондарға таянып, фаразлай ғына ала. Ләкин бар аныҡлыҡ тик Уға ғына билдәле. Ә күрәҙәлектәргә килгәндә, уларҙың күбеһе томанлы текст менән бирелә. Нострадамус яҙған текстарҙы, мәҫәлән, берәйһе күргәнме лә, уны төп нөсхәһендә уҡығанмы һуң? Юҡ, әлбиттә.

**ҺОРАУ: Әгәр ҙә һинең ауырыуыңды медиктар дауалай алмаһа һәм ул ысынлап та сихыр ғәләмәте булһа, үҙ-үҙеңә нисек ярҙам итергә һуң?**

**ЯУАП:** Үҙеңдең ихтыярыңды һәм рухыңды яҡшы формала һаҡлау бик кәрәк. Ғәҙәти булмаған әхлаҡи һәм психологик баҫым, йә булмаһа, эштәреңдең насар яҡҡа китеүен тояһың икән, үҙеңде һәм эштәреңде яҡшылап анализла, бер аҙ хәл ал һәм артабан кит. Теләһә ниндәй тышҡы ҡаршылыҡ йә эске бәлтерәү - ул һынау. Уның аша ышаныслы һәм һаҡ ҡына үтеп, беҙ ҡылған гонаһтарыбыҙҙан арынабыҙ. Ҡаршылыҡты үтеү һәм Аллаһы Тәғәлә ярҙамы менән эске һәм тышҡы хәлде көйләүҙә камиллыҡҡа ынтылыу мотлаҡ.

Ошоларҙы эшләгәндән һуң да үҙеңдә ниндәйҙер ауырлыҡ һәм эштәреңдең аҡрынайыуын тояһың икән, бер нисә Ҡөрьән аятын уҡып, унан арынырға була. Мәҫәлән, Ҡөрьәндең икенсе, өсөнсө, етенсе, унынсы, илле туғыҙынсы сүрәләре. Шулай уҡ "Ясин" сүрәһен уҡырға йә аҙан әйтергә мөмкин.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: тын алыу күнегеүҙәренең барлыҡ хәрәкәттәре лә иркен, еңел, көсөргәнешһеҙ эшләнергә тейеш. Шуға күрә, әгәр физик хәл-торошоғоҙ уларҙы еңел һәм көсәнмәй генә эшләү мөмкинлеге бирмәй икән, көсөргәнештән мөмкин тиклем арынып, ашыҡмай һәм һәр 8 тын алыу-тын сығарыуҙан һуң 2-5 түгел, ә 10 секунд ял итеп эшләгеҙ.

Әгәр хәлегеҙ насар булһа, тубыҡ менән ҡаршы яҡ ҡулығыҙҙың терһәгенә тейеү ауырлыҡ тыуҙырһа, был күнегеүҙе еңелсә вариантта башҡарырға була. Был осраҡта дүрт тағанлап торған килеш бер ҡулдың терһәгенә ҡаршы яҡ аяҡтың тубығы менән түгел, киреһенсә, тубыҡҡа ҡаршы яҡ ҡулдың терһәген тейҙерергә тырышығыҙ.

Әгәр радикулит, умыртҡа һөйәгенең билһигеҙгүҙ бүлеге остеохондрозы яфалай, умыртҡа дискылары ҡаймыҡҡан йәки һеҙ умыртҡа һөйәге йәрәхәтен кисергәнһегеҙ икән, был осраҡта тубыҡҡа һәм устарға таянып дүрт тағанлап тораһығыҙ һәм тубыҡ менән ҡаршы яҡ ҡулдың усына тейергә һәм бер үк ваҡытта танау менән көслө, шаулы итеп тын алырға кәрәк. Дөйөм норма шул уҡ - 96 тын алыу-тын сығарыу.

Шулай уҡ ошо комбинация ла мөмкин: дүрт тағанлап тороп, 32 тапҡыр тын алғандатын сығарғанда (8x4), уң тубыҡ менән һул терһәккә тейәбеҙ һәм, киреһенсә, һул тубыҡ менән уң терһәккә. Артабан 32 тапҡыр тубыҡтар тик тора, терһәктәр генә эшләй, йәғни терһәктәр менән тубыҡтарға тейәбеҙ. Өсөнсө "утыҙҙы" устарҙа һәм тубыҡтарҙа торған килеш, тын алғанда тубыҡ менән ҡаршы яҡ ҡулдың усына тейергә кәрәк.

"Дүрт тағанлап рок-н-ролл" күнекмәһе ҡулдарҙы, аяҡтарҙы, умыртҡа һөйәген тулыһынса хәрәкәтләндерә. "Төп" һәм "Ярҙамсы" күнегеүҙәр комплексы менән бергә ул мейеләге ҡан әйләнеше боҙолған, төрлө йәштә аяҡ-ҡулдары йәрәхәтләнгән кешеләрҙе реабилитациялау методикаһына индерелгән. Был күнегеү операциянан һуң ауырыуҙарға ҡурылдайҙа, үпкәләрҙә лайла йыйылып тормаһын өсөн тын алыу ҡалыбын үҙгәртергә һөҙөмтәле ярҙам итә. Һауаны үпкә бүлексәләренә эшкә оҙатып, һеҙ умыртҡа һөйәгенең нығыныуына ярҙам итәһегеҙ, бәүел-енес системаһын тонуста тотаһығыҙ, тотош организмдың һалҡын алдырыу сирҙәренә ҡаршылығын арттыраһығыҙ, үҙегеҙгә гиподинамия менән көрәштә ярҙам итәһегеҙ. Күнегеү бигерәк тә оло йәштәге кешеләргә, климакс ваҡытында ҡатын-ҡыҙҙарға һәм ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеге боҙолған ауырыуҙарға ярҙам итә.

## "Дүрт тағанлап насос"

Тубыҡтар һәм устар менән ергә йәки иҙәнгә таянабыҙ (ҡулдар тура, терһәктә бөкмәйбеҙ). Баш аҫҡа эйелгән, ике ус араһындағы арауыҡҡа ҡарайбыҙ, муйын көсөргәнештән азат.

"Бер" тигәндә оса менән аяҡтарға ултырған ыңғайы тын алабыҙ (ҡулдар һуҙыла). Тынды сығарғанда тәү торошҡа ҡайтабыҙ. Баш һәр саҡ аҫҡа эйелгән. Тубыҡҡа тиклем аяҡтар һәм устар һәр саҡ ерҙә йәки иҙәндә. Турайғанда кәүҙә ауырлығы аяҡтарға һәм ҡулдарға төшһә, ултырғанда ауырлыҡ аяҡтарға тура килә.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## БСТ
## 16 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК

7.00 Сәләм.
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм.
10.00 Т/с "Тест на любовь". [12+]
11.00 Итоги недели (на рус. яз.).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 "Бай". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Тест на любовь". [12+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Ради добра. [6+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Реальный футбол. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 Теге өсәү. [12+]
23.30 Күстәнәс. [12+]
0.00 Х/ф "Мужчины есть мужчины". Новости (на баш. яз.). [12+]
1.45 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "Среда, среда". [12+]
5.00 Бай бакса. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 17 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Тест на любовь". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 Республика Live. #Дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Дорога к храму. [0+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Тест на любовь". [12+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Реальный футбол. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
18.45 Хоккей. КХЛ. ХК "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Куньлунь РС" (Пекин).
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Честно говоря. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "В осаде". [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "И это жизнь?" [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 18 СЕНТЯБРЯ
## СРЕДА

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Тест на любовь". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 Честно говоря. [12+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бала-саға. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Тест на любовь". [12+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Великий Уфимец. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 Историческая среда. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Реальный футбол. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 Земляки. [12+]
0.00 Х/ф "Вулкан страстей". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "Под знаком Марса". [12+]
4.45 Ете егет. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 19 СЕНТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Тест на любовь". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Земляки. [12+]
14.45 Ради добра. [6+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Тест на любовь". [12+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Реальный футбол. [12+]
18.30 Хоккей. КХЛ. ХК "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Авангард" (Омск).
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Республика Live. #Дома. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 "Песня года". [12+]
23.30 Автограф. [12+]
0.00 Х/ф "Залив счастья". Новости (на баш. яз.). [12+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "Нэркэс". [12+]
5.00 Автограф. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 20 СЕНТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Д/ф "Сердце. 40 лет спустя". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 "Йома". [0+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Интервью. [12+]
12.30 Башҡорттар. [6+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Үткән ғүмер. [12+]
14.00 "Весело живем". [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Алтын тирмә. [0+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Д/ф "Все мы - одна семья". [12+]
17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 "Йома". [0+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 По сути дела... [12+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 Башҡорттар. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Интервью. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 Караоке по-башкирски. [12+]
23.45 Земляки. [12+]
0.00 Х/ф "Сделка". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.00 Спектакль "Бесталанная". [12+]
4.00 "Весело живем". [12+]
4.15 Караоке по-башкирски. [12+]
5.00 Башҡорттар. [6+]
5.30 Д/ф "Сердце. 40 лет спустя". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 21 СЕНТЯБРЯ
## СУББОТА

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 Д/ф "Еду в деревню". [12+]
9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 "Перекличка". [6+]
10.30 Байтус. [6+]
10.45 Сыйырсыҡ. [0+]
11.00 Күстәнәс. [12+]
11.30 Бай баҡса. [12+]
12.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
12.30 Ете егет. [12+]
13.15 Земляки. [12+]
13.30 Хазина о Хазине. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30 Автограф. [12+]
16.15 Хоккей. КХЛ. ХК "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Нефтехимик" (Нижнекамск).
19.00 Новости (на баш. яз.).
19.30 Полезные новости. [12+]
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Деловой Башкортостан. [12+]
20.15 Ради добра. [6+]
20.30 "Байыҡ-2019". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Посмотрим... [12+]
22.30 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]
0.00 Х/ф "О бедном гусаре замолвите слово". [12+]
2.45 Итоги недели (на баш. яз.).
3.30 Спектакль "Озорная молодость". [12+]
6.00 Д/ф "Все мы - одна семья". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 22 СЕНТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 МузКәрәҙ. [0+]
10.15 "Книга сказок". [0+]
10.30 "Детей много не бывает". [0+]
11.00 "Сулпылар". [0+]
11.30 Гора новостей. [6+]
11.45 Бирешмә. Профи. [12+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз.).
13.15 Алтын тирмә. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30 Башҡорттар. [6+]
16.00 Дорога к храму. [0+]
16.30 Историческая среда. [12+]
17.00 Концерт Государственного академического ансамбля народного танца им. Ф.Гаскарова. [12+]
18.30 Репортаж, посвященный 120-летию со дня рождения командира 112-ой Башкирской кавалерийской дивизии Минигали Шаймуратова. [12+]
19.15 Ты можешь! [12+]
19.45 Әлләсе... [6+]
20.30 "Теге өсәү" [12+]
21.00 Республика Live. #Дома. [12+]
21.30 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15 Специальный репортаж. [12+]
22.30 "Красная кнопка". [16+]
23.15 "Байыҡ-2019". [12+]
0.15 Х/ф "Любимая женщина механика Гаврилова". [0+]
1.45 Спектакль "Чайка". [12+]
4.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]
5.30 Историческая среда. [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
6.45 Специальный репортаж. [12+]


ЭТО ПОЛЕЗНО ЗНАТЬ

# Обогреватель с эффектом горячего кирпича

## Современный вариант русской печи от завода "ТеплЭко"




**В старину русская печь занимала половину избы, требовала внимания и заботы, а за отдаваемое тепло заставляла человека поработать. Зато в доме всегда было тепло и комфортно. Современная система центрального отопления избавила нас от необходимости растапливать печь и подкидывать дрова, но многие все же не отказались бы обзавестись хотя бы "буржуйкой".**

Что ж, мечты сбываются! Не "буржуйкой", а целой русской печью сегодня может обзавестись каждый, при этом займет новая печь всего *около одного квадратного метра на стене,* не потребует дров и вообще какого-либо внимания, ее всего лишь надо включить в розетку.

Речь идет об экономичном обогревателе **"ТеплЭко",** который сочетает в себе теплоносные характеристики кирпича русской печки и современные технологии, сделавшие его компактным и экономным.

### МЕЧТЫ О ТЕПЛЕ

Во многих квартирах батареи то греют, то не греют. Если в мае квартирную "печку" можно отключить, в сентябре ее не включишь, так как отопительный сезон еще не начался. А еще иногда батареи засоряются... А еще падает давление в системе... А еще... Да мало ли отговорок мы слышали о том, почему в квартире вдруг становится холодно. Послушав о причинах похолодания, мы достаём обогреватели, какие у кого есть: масляные, тепловентиляторы, калориферы. Одни сушат воздух, другие угрожают пожаром, к третьим нельзя подпускать детей. В общем, мороки с ними не меньше, чем с громадной русской печью. При этом они еще крайне "прожорливы": счет за электроэнергию лучше оплачивать с закрытыми глазами!

Обогреватель **"ТеплЭко"** разом решает все эти проблемы. Он представляет собой декоративную панель, внутри которой спрятан хромоникелевый нагреватель, залитый составом из кварцевого песка. **"ТеплЭко"** можно использовать, как отдельно, так и создавать отопительные системы - количество обогревателей зависит от площади. Один обогреватель устанавливается на 9 квадратных метров, при условии стандартной высоты потолков. До требуемой температуры такая панель нагревается за 10-15 минут, а остывает, как плотная кирпичная стена - несколько часов.



**"ТеплЭко"** не сушит воздух, не сжигает кислород, пожаробезопасен (так как поверхность не нагревается более чем до 98 градусов) и в четыре раза экономнее обычного чайника (даже за сутки работы одна панель потребляет всего 2,5 кВт при использовании терморегулятора). Номинальная мощность обогревателя: 400 Вт, размер: 600 мм*350мм*25мм, вес: 12 кг.

### ВЛИЯНИЕ НА ЗДОРОВЬЕ ЧЕЛОВЕКА

Тепло - это инфракрасные лучи, но не все из них безопасны для человека, только те, которые находятся в диапазоне излучения человеческого тела - от 6 до 20 мкм. Внешнее излучение с такими длинами волн наш организм воспринимает как своё собственное и интенсивно его поглощает. За счет этого в организме активизируется микроциркуляция крови, ускоряется метаболизм, улучшается самочувствие, исчезает усталость. Природный источник длинноволновых инфракрасных лучей - это солнце, а бытовой - русская печь, излучающая тепло, комфортное для организма. Обогреватели **"ТеплЭко"** используют естественные свойства кварцевого песка накапливать тепло, а затем долгое время отдавать его в длинноволновом инфракрасном диапазоне по принципу горячего кирпича. В отличие от всех других обогревателей, **"ТеплЭко"** не только безвреден, но и оказывает благотворное влияние на здоровье человека.

### САМОСТОЯТЕЛЬНЫЙ И НАДЁЖНЫЙ

Главное преимущество обогревателя **"ТеплЭко"** - его самостоятельность. Оптимальную температуру, которую он должен поддерживать в комнате, можно задать с помощью терморегулятора. *И все. Он будет работать, создавая атмосферу настоящего домашнего, "обжитого" уюта - когда можно играть с детьми на полу, спокойно спать, ворочаясь и раскрываясь, какие бы морозы ни трещали за окнами.* Еще обогреватель **"ТеплЭко"** идеально подходит для дачи, гаража и офиса. Несколько обогревателей способны полностью заменить центральное теплоснабжение.

Завод **"ТеплЭко"** является единственным в России производителем энергосберегающих обогревателей из кварцевого песка высокой степени очистки. Купить обогреватель вы можете в нашем фирменном магазине или заказать доставку по телефону. А для установки обогревателя потребуется минимум сил и сноровки, три самореза и отвертка.

И пусть простота обогревателя не вызывает никаких сомнений в его долговечности. Как известно, все гениальное устроено довольно просто. И обогреватель **"ТеплЭко"** может работать практически вечно, ведь его нагревательные элементы не контактируют с воздухом и не окисляются. Гарантия пожизненная, срок эксплуатации 10 лет.

**ЭКОНОМИЧНЫЙ** 2-3,5 кВт в сутки при использовании терморегулятора

**БОЛЬШОЙ СРОК СЛУЖБЫ** Срок службы 10 лет, гарантия пожизненная

**БЕЗОПАСНЫЙ** 100% пожаробезопасность

**КОМФОРТНЫЙ** Не сушит воздух, не сжигает кислород

**ПРОСТОЙ В УСТАНОВКЕ** Справится любой хозяин дома

**ЭКОЛОГИЧНЫЙ** Наша продукция соответствует санитарным требованиям

**ПОЛЕЗНЫЙ ДЛЯ ЗДОРОВЬЯ** Улучшает самочувствие, исчезает усталость

СДЕЛАНО В РОССИИ

Подтверждено европейское качество

CE

ТЕПЛЭКО

Единственный фирменный магазин компании "ТеплЭко" в Уфе расположен по адресу:
**ул. Конституции, 2. Время работы: пн. - суб. с 10 до 20 часов без обеда, воскресенье - выходной. Тел.: (347)214-93-08, (964) 956-23-00, 8 800 333 05 35 (звонок бесплатный по России)**
ОСТЕРЕГАЙТЕСЬ ПОДДЕЛОК!
tepleko.ru
ОГРН 1177847333993

На правах рекламы.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АЙЫҠ АУЫЛДАР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**36-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Отряд. Кусимов. Ҡаған. Нил. Ҡороҡ. Икэбана. Нафиҡов. Рәсем. Ауырса. Ыштан. Төш. Дүнән. Имән. Тояҡ. Елкән. Окоп. Ас. Мавр. Рәсәй. Халиҡов. Урманлы.

**Вертикаль буйынса:** Нарыҫтау. Нефертити. Ҡайнатма. Көс. Сырхау. Бивак. Орсоҡ. Тоҡом. Ангина. Ғәбдрәшитов. Крузо. Диван. Ҡар. Днепр. Әпәү. Елкә. Ҡом. Нәнәй.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Сентябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (17) дүшәмбе | 5:21 | 6:51 | 13:30 | 17:59 | 19:29 | 20:59 |
| 17 (18) шишәмбе | 5:23 | 6:53 | 13:30 | 17:57 | 19:27 | 20:57 |
| 18 (19) шаршамбы | 5:25 | 6:55 | 13:30 | 17:54 | 19:24 | 20:54 |
| 19 (20) кесе йома | 5:27 | 6:57 | 13:30 | 17:52 | 19:22 | 20:52 |
| 20 (21) йома | 5:28 | 6:58 | 13:30 | 17:49 | 19:19 | 20:49 |
| 21 (22) шәмбе | 5:30 | 7:00 | 13:30 | 17:47 | 19:17 | 20:47 |
| 22 (23) йәкшәмбе | 5:32 | 7:02 | 13:30 | 17:44 | 19:14 | 20:44 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҠЫҘ-ҠАТЫН ҠОЛАҒЫНА*

## ҺЫРҘАРҘАН...

Бер ҡалаҡ Е витаминын (дарыуханаларҙа һатыла) ошо уҡ күләмдәге һырғанаҡ майы һәм какао майы менән бутарға. Тәрән һырҙар булған урындарға һөртөргә, 15 минуттан тирегә һеңмәгән майҙы салфетка менән ҡоротоп алырға. Йоҡлар алдынан аҙнаһына 2-3 тапҡыр эшләһәгеҙ, бит тиреһендәге тәрән һырҙар, бигерәк тә күҙҙәр тирәһендәгеләре тигеҙләнеп, тирегеҙ йомшарып ҡаласаҡ.

## ҠУЛДАРЫҒЫҘ...

Баҡсасыларҙы ҡулдарына ҡарап та танырға була, тиҙәр. Ысынлап та, ер эше ҡул тиреһенең тупаҫланыуына килтерә. Һеҙгә ябай ғына кәңәш: 100 грамм 3 процентлы водород перекисына 10-20 грамм нашатыр спирты, аҙ ғына кер порошогы йәки һауыт-һаба йыуыу өсөн тәғәйенләгән шыйыҡлыҡ өҫтәйбеҙ. Барыһын бергә болғап, ҡулдарҙы ошо ҡатнашмаға тығырға. Һуңынан ҡулдарҙы һабын менән йыуып, туҡландырыусы крем һөртөргә.

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ФОЛЬКЛОРСЫЛАР ҺӘМ...




**27-28 сентябрҙә Өфөлә II "Фолк-тайм" Фольклор сәнғәте республика конкурсы үтә. 2020 йылдағы Бөтөн донъя фольклориадаһына әҙерлек сиктәрендә ойошторолған был бәйге республика халҡы хәтерендә сағыу тамаша булып ҡалмаҡсы.**

Бәйгелә үҙ ижади эшмәкәрлеген милли мәҙәни йолаларҙы һаҡлау һәм тергеҙеүгә бағышлаған үҙешмәкәр коллективтар ҡатнаша. Конкурс түбәндәге номинациялар буйынса үтәсәк:

- "Вокал башҡарыу" (ансамбль ике халыҡ йырын фонограмма ҡулланмайынса музыка ҡоралына ҡушылып йә музыкаһыҙ башҡарырға тейеш);
- "Вокал-инструменталь башҡарыу" (вокал-инструменталь ансамбль электрон инструменттар һәм фонограмма ҡулланмайынса, ике әҫәр башҡара);
- "Инструменталь башҡарыу" (халыҡ уйын ҡоралдары ансамбле электрон инструменттарһыҙ ике төрлө характерҙағы әҫәр башҡара);
- "Фольклор композицияһы" (фольклор төркөмө халыҡтың йолаһы, байрамын һ.б сағылдырған театрлаштырылған тамаша күрһәтә һәм уларҙың сығышында халыҡ ижадының бөтөн жанрҙары - йыр, бейеү, сәсәнлек, инструментҡа ҡушылып башҡарыу һ.б. ҡулланыла ала. Сығыш 10 минутҡа тиклем).

Ҡатнашыусылар дүрт - 8 йәштән 14 йәшкә, 15 йәштән 21 йәшкә, 22 йәштән өлкән һәм ҡатнаш йәш төркөмдәренә бүлеп баһалана.

Сараның 2-се туры һәм финалы Өфөлә, "Торатау" конгресс-холында уҙасаҡ. Тамашасылар шулай уҡ оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнаша аласаҡ. Бөтөн һорауҙар буйынса Республика халыҡ ижады үҙәгенең Мәҙәниәт йортона, 8 (347) 2735051 телефоны буйынса шылтыратырға.

# ... МӨНӘЖӘТСЕЛӘР ЙЫЙЫЛА



**27 сентябрҙә Сибай ҡалаһының Балалар ижады үҙәгендә VI Төбәк-ара мөнәжәт әйтеүселәр конкурсы уҙғарыла.**

Конкурстың маҡсаттары: милли мәҙәниәттең һирәк башҡарылған жанрын һаҡлап ҡалыу; мөнәжәт, нәсихәт, Мәүлит Ямалетдинов шиғри юлдарға һалған Ҡөрьән сүрәләрен иң оҫта башҡарыусыларҙы асыҡлау, уларға ярҙам күрһәтеү; мөнәжәттәр башҡарыуға һәм уны тергеҙеүгә йәмәғәт ойошмаларының иғтибарын йәлеп итеү; йәштәрҙә эстетик зауыҡ һәм илһөйәрлек тәрбиәләү. Конкурста теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Унда өс номинация: мөнәжәт әйтеү, нәсихәт башҡарыу, Мәүлит Ямалетдинов шиғри юлдарға һалған Ҡөрьән сүрәләрен башҡарыу. Һәр ҡатнашыусы төрлө характерҙағы ике йәки өс әҫәр башҡара. Конкурс ике йәш категорияһында (17 йәшкә тиклем, 18 йәштән өлкәндәр) яңғыҙ башҡарыусылар һәм коллективтар араһында үтә. Ҡатнашыусыларҙың сығыштарын компетентлы жюри баһалай, уның составына Башҡортостандың билдәле сәсәндәре, мәҙәниәт һәм мәғариф эшмәкәрҙәре инә.

Ғаризалар 2019 йылдың 26 сентябренә тиклем Сибай ҡалаһы, Таусылар проспекты, 14 адресы буйынса ҡабул ителә. Сибай сәнғәт колледжы, Мәүлитова Луиза Вилюр ҡыҙы, телефон һәм факс: 8(34775) 2-46-32; 8-999-131-18-37, электрон почта: luizakurrai@gmail.com; Ғәйнуллина Асия Солтан ҡыҙы, Сибай сәнғәт колледжының "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе етәксеһе. Телефон: 8-960-383-46-09. Ойоштороусылар - Республика халыҡ ижады үҙәге булышлығында Сибай ҡалаһы хакимиәте, Сибай сәнғәт колледжының "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе, Сибай ҡалаһының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты.

✔ *Бер тин һумды һаҡлай, бер көн йылды һаҡлай.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*ӘҘИП МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# ЙӨРӘККӘ УЙЫЛҒАН...

## "Һин - журналист" тигән тамға



(Башы 11-се биттә).

➔ **Журналист - ул бөтөн башҡа өлкәләрҙә лә, һөнәрҙәрҙә лә, кешеләрҙә лә, үткәндә лә, бөгөнгөлә лә, киләсәктә лә эше булған берҙән-бер һөнәр эйәһе, минеңсә. Ул бер нәмәгә лә битараф булып ҡала алмай һәм күп осраҡта үҙен баҫым аҫтына ҡуя ла. Битараф булып ҡалырға теләгән мәлдәр буламы?**

- Битараф түгелбеҙ бит инде - шуға ла беҙ журналист. Әллә ниңә һөйләшеүҙең буйынан-буйына Рәми ағайҙың әйткәндәре иҫкә төшә лә тора: "Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән, дөрөҫ һүҙең әгәр һуңлаһа..." Урал батырҙың васыятынан һуң был донъяға ҡарап нимә әйтеп була һуң? "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ! Кеше булһын затығыҙ". Әммә журналист заман һүҙен еткерә ала. Һәр замандың үҙ проблемалары бар, һис көтөлмәгән мәсьәләләре тыуа, улар хаҡында тап ҡәләм һәм фекер эйәләре һүҙен әйтә лә инде. Әгәр заманында Рәми, Әхиәр, Әкрәм ағайҙар һүҙен әйтмәгән булһа, тотош СССР-ҙа милли баҫмалар бөтөрөлгән булыр ине. Анау хәтлем үрнәк заттар булғанда, "Урал батыр" кеүек мәшһүр эпосты ижад иткән халыҡтың вәкиле булыуыңды тойоу - иңдәремә бурыс булып ятты, ҡанаттар үҫтерҙе, ғүмеремде яҡты һәм йырлы итте. Битарафлыҡтан Хоҙайым һаҡлаһын!

➔ **Өс егеттең әсәһе булыу һәм әлеге тынғыһыҙ хеҙмәтте алып барыу алымдарын да һөйләһәң ине?**

- Аллаҡайыма мең шөкөр, балалар ни үҫә инде ул. Мин күп балалы беренсе ҡатын түгел башҡорт журналистикаһында, иманым камил, һуңғыһы ла булмаясаҡмын. "Лариса Абдуллина" ул псевдоним ғына бит ул, Миләүшә! Ошо исемгә балаларымды ҡарашҡан әсәйем дә, ирем дә, ҡәйнәм дә, әсәһе менән командировкаларға йөрөгән, киске сараларҙан ҡалмаған улдарым да, ғүмеремә етерлек һабаҡ биргән, доғалары менән мине ҡурсалап торған нәнәйемдәр, сәфәрҙәрҙә арҡамдан һөйөп, яратып ҡалған ағинәйҙәр, кәңәштәре менән ярҙам иткән ағайҙарым, гәзиткә номерға тип ашығып яҙып биргән мәҡәләләремде төҙәтешкән коллегаларым да хеҙмәт итә.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА яҙып алды.**

*БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК*

# ЕРӘНСӘЙ СУМҒЫС НИМӘ БУЛА?

**Биология фәндәре докторы, БДУ-ның Сибай институты профессоры Сәфәрғәли Йәнтүриндың "Зоология терминдарының русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлеге"нән Башҡортостанда йыш осраған ҡоштарҙың башҡортса-русса атамалары менән танышығыҙ.**

**Казарка краснозобая** - ҡыҙыл боғаҡ казарка, ҡара ҡаҙ
**каменка-плясунья** - бейеүсе таштурғай
**каменки** - таштурғайҙар
**камышница** - һыу тауығы, ҡуҡый
**камышевка-барсучок** - сыбар ҡурҙай
**канюки** - һарҙар
**кедровка** - баян ҡош, шыршы һайыҫҡаны
**клест-сосновик** - ҡарағай турғайы
**клест-еловик** - шыршы турғайы
**клинтух** - урман күгәрсене
**клуша** - клуша, клуша сарлаҡ
**князек (белая лазоревка)** - буран турғайы
**кобчик** - мүктәрге
**козодой обыкновенный** - төн күгәрсене, тырылдаҡ
**конек луговой** - һаҙ деүете
**коноплянка** - киндер турғайы
**коростель** - тартай
**крапивник** - кесерткән турғайы
**красавка, журавль-красавка** - ҡара торна
**красноносый нырок** - ерәнсәй сумғыс
**красношейная поганка** - ҡолаҡлы сыпҡай
**кроншнеп малый** - яр көйөлдәһе
**курганник** - дала һары, ялан һары
**красноголовый нырок** - сумғыс өйрәк
**кроншнеп средний** - һаҙ көйөлдәһе
**кречет** - шоңҡар
**кряква** - һуна өйрәк
**кукша** - ҡыжҡылдаҡ
**кулик** - көйөлдә
**кулик перевозчик** - тебет
**кулик сорока** - ҡом һайыҫҡаны
**кулик черныш** - ҡара сәпсәү
**куропатка серая** - ҡыр тауығы
**лазоревка** - күкбаш турғай
**ласточка береговая** - яр ҡарлуғасы
**лебедь кликун** - ҡаңғылдаҡ аҡҡош
**лебедь-шипун** - быҫылдаҡ аҡҡош
**лесная завирушка** - сөрәкә турғай
**лесной конек** - урман деүете
**луговой лунь** - билала, көйгәнәк
**луток** - аҡсабан, бәләкәй ҡушы
**лунь степной** - сыҫҡансыҡ, дала көйгәнәге
**лысуха** - ҡашҡабаш, таҙбаш
**малая выпь** - ваҡ мөншөгөр
**малая крачка** - ваҡ сарлаҡ
**малая мухоловка** - ваҡ себен турғайы
**малый зуек** - ваҡ тәтелдәүес
**малый пестрый дятел** - бәләкәй сыбар тумыртҡа
**малый погоныш** - ҡуҡый, һыу бүҙәнәһе
**морская чернеть** - ҡарабаш өйрәк
**московка** - бесбесей
**мохоногий канюк** - йомағара, тау һары
**мохоногий сыч** - йөнтәҫ аяҡ һупайҙы, һупылдаҡ ябалаҡ
**мухоловка-белошейка** - аҡтамаҡ себен турғайы
**мухоловка-пеструшка** - ала себен турғайы
**неясыть бородатая** - һөмәй
**обыкновенная кукушка** - кәкүк
**обыкновенная чечевица** - ҡантүш турғай
**обыкновенный дубонос** - балғыбаш
**обыкновенная чечетка** - таҡыябаш турғай
**овсянка обыкновенная** - һоло турғайы
**овсянка садовая** - һарытамаҡ турғай
**огарь** - ҡыҙыл өйрәк
**оляпка** - һыу турғайы
**осоед обыкновенный** - һары һағыҙаҡ
**овсянка-крошка** - ваҡ һоло турғайы
**озерная чайка** - ҡарабаш аҡсарлаҡ
**орел-могильник** - аҡ яурын сал бөркөт
**орел степной** - көсөгән, дала бөркөтө
**орлан-белохвост** - диңгеҙ бөркөтө

(Дауамы. Башы 33-34, 36-сы һандарҙа).

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕР ҠАТЫНДА...

## ҡырҡ ир хәйләһе бар

Бер тин һумды һаҡлай, бер көн йылды һаҡлай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кем ниндәйҙер эште башлар алдынан уҡ үҙен яртылаш еңелгән тип иҫәпләй, ул, ысынлап та, көрәшкә тотонғанда уҡ яртылаш еңелгән була.

**(Д. Писарев).**

Кеше ярһыуы көрәшкә егелмәгән байлыҡ юҡ, кешенең күҙ йәштәренә мансылмаған ҡыуаҡлыҡ юҡ, кеше ҡаны түгелмәгән бер киҫәк кенә лә ер юҡ.

**(А. Грюн).**

Элек ҡайһы берәүҙәр мемуарҙар яҙып, йәшәү өсөн аҡса эшләгән. Хәҙер иһә мемуарҙар яҙып баҫтырыу менән янап, тағы ла күберәк аҡса эшләүселәр бар.

**(П. Устинов).**

Үс алыу - ул үҙеңде тешләгән этте тешләү менән бер.

**(О. О'Малли).**

Доға уҡығанда беҙ һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән донъяны үҙгәртеүҙе һорайбыҙ, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү тураһында һорарға онотабыҙ.

**(Ф. Мориак).**

Ахмаҡлыҡ эшләргә ҡурҡмаған кеше һаман йәш әле.

**(П. Капица).**

Ғүмер оҙон, әгәр ул тулы булһа ғына. Шуға ла ғүмерҙе ваҡыт менән түгел, ҡылыҡтарың менән үлсә.

**(Сенека).**

Мәңгелек ғазаптан ҡотолорға теләһәң, бер кемде лә ғәйепләмә, бер кемгә лә яла яҡма - Хоҙай быны яратмай.

**(Нил Синайский).**

Бөйөк эштәргә хеҙмәт иткән кеше был эштәрҙе үҙенә лә хеҙмәт иттерә ала.

**(Томас Элиот).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер билдәле шағир үҙ әҫәрендә шулай тип фекер йөрөтә: "Беҙҙең бар тормошобоҙ - оҙон бер коридор, ике яҡлап бик күп ишектәр урынлашҡан. Ул ишектәрҙең ҡайһы берҙәренә "Беләм", икенселәренә "Ышанам" тип яҙылған. Беҙ коридор буйлап киләбеҙ һәм ишектәрҙең ҡайһыһына инергә белмәйбеҙ. Ҡайһы ишек артында хәҡиҡәт, ҡайһыһында - ялған, тип баш ватабыҙ. Әммә... ишекте дөрөҫ һайламай, яңылышабыҙ. Ә аҙаҡ: "Ниңә былай килеп сыҡты һуң әле?" - тип аптырайабыҙ. Мин бит белә инем, тибеҙ. Эйе, мәңгелек йомаҡ был. Бында аҡыл ғына ярҙам итмәйәсәк. Ышанһаң - көслө булырһың, белдекле икәнһең - көсһөҙ... Шуға ла, һеҙҙең алда "Нисек йәшәргә?" тигән һорау торһа, йөрәгеңдән һора. Аҡыл - хәйләкәр ул, ә йөрәк һәр ваҡыт дөрөҫтө белә".**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
13 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3707
Заказ - 1811/09


«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.